ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

27-3 июнь - июль (һөтай - майай)

2015

№26 (652)

ЗОЛОТОЙ ФОНД ПРЕССЫ 2015

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Яҡшы белгестәр булып...**

Өфөбөҙгә ҡайтығыҙ!



5

**Өфөнөң йәше...**

боронғо карталарҙа



7

**Милли вуз ниндәй булырға тейеш?**



Әлбиттә, Сибай институты һымаҡ! 8-9

**Батыр төбәгендә бер көн,**

йәғни Салауат ерендәге байрам тәьҫораттары



11

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Һеҙҙең арала 2015 йылдың икенсе ярты йыллығы өсөн "Киске Өфө" (индексы: 50665) гәзитенә яҙылырға онотҡандар барҙыр, моғайын. Хәлде төҙәтергә мөмкин: июлдең 17-һенә тиклем яҙылып, яратҡан баҫмағыҙҙы августан уҡый башлай алаһығыҙ. Гәзиткә яҙылыу тураһындағы квитанцияларығыҙҙы редакцияға ебәрһәгеҙ, кемдәргәлер бүләккә матур китаптар ебәреп ҡыуандырыу ниәтебеҙ ҙә бар. Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Йәштәрҙе әрләү, тәнҡитләү һәр быуын кешеләренең теленән төшмәй торған бер ғәҙәт. Ә бына һеҙгә йәштәрҙең ҡайһы яғы оҡшай һәм оҡшамай?

*Хәбирйән ТАҺИРОВ, мәғариф һәм матбуғат ветераны, Кыйғы районы:* Йәштәрҙе әрләргә түгел, киреһенсә, күберәк ышаныс күрһәтергә кәрәк уларға, тип уйлайым мин. Юғиһә, йыш ҡына үҙаллы эшләргә мөмкинлек бирмәгәнлектән, уларҙың башланғысы баҫылып ҡала, йәштәрҙең күңеле ҡайта, эшкә дәрте һүнә. Быны өсөн уларға эшләп күрһәтергә кәрәк, тик һис кенә лә улар өсөн эшләп бөтөрөп ҡуйырға түгел. Бергәләп башлағанды йәштәр үҙҙәре күтәреп алырлыҡ, артабан эшләп алып китерлек итеп өйрәтә белергә кәрәктер ул. Хәҙер урындарҙа ижтимағи ойошмалар бик күп. Ҡараһаң, уларҙың составында йәштәр бөтөнләй юҡ, тип әйтерлек. Ә бит уларҙы ана шул ойошмалар эшенә йәлеп итергә, ултырыштарға саҡырып, уларҙың да фекерҙәренә ҡолаҡ һалырға тейешбеҙ. Бөгөнгө көндә, әйтеп китеүемсә, йәштәр күп осраҡта күҙ уңынан ысҡындырыла. Унан инде улар бар ынтылыштарын рухи ҡиммәттәрҙән матди ҡыҙыҡһыныуға күсерә башлай. Быны, бер яҡтан, насар тип тә әйтеп булмай, ләкин ҡайһылары еңел аҡсалы булыуға өмөт тотоп, рекламаға эйәреп, кредит, ипотека юллай башлай һәм банк алдында муйынын бурысҡа бата. Ахырҙа, аңҡытиңке килеп, түләй алмай, эш эҙләп, ауылдан ситкә сығып китергә мәжбүр була. Ярай ҙа бит ауылда үҙ урынын табып, үҙ эшен асып, нығынып китә алһа... Был юлда ла йәштәребеҙҙе бик күп ҡаршылыҡтар, һәр төрлө кәртәләр һағалай. Ана шуларҙы йырып сығып, матур ғына эш башлап ебәргән бер нисә егетте беләм. Миңә уларҙың ҡаршылыҡтар алдында баҙап ҡалмауы, маҡсаттарына өлгәшеү юлында күрһәткән ныҡышмаллыҡтары ифрат оҡшай. Бындай уңышҡа өлгәшеү һәр кемдең дә ҡулынан килмәй, ә башҡаларға ни эшләргә һуң, тигән һорау тыуыр. Уҡыһындар йәштәребеҙ, ниндәй ҙә булһа һөнәргә, бигерәк тә техник белемгә эйә булһындар. Гел генә эш тә булмай тормаҫ: донъялар үҙгәрә, илгә белгестәр кәрәк буласаҡ, тип өмөтләнергә кәрәк. Һәр хәлдә, халыҡ әйтмешләй, һөнәрле хур булмаҫ.

(Дауамы 3-сө биттә).

ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ!

# ДЕПУТАТТАРҒА...

## йышыраҡ мөрәжәғәт итһен халыҡ



**Өфө халҡының уңышлы һәм яҡшы тормошта йәшәүе күпселек осраҡта миллионлы ҡала менән идара итеү механизмының ни рәүешле көйләнеүенә ҡайтып ҡала. Баш ҡала округы Советы эшмәкәрлеге, уның алдында торған проблемалар һәм уларҙы хәл итеү юлдары, ҡаланы үҫтереү идеялары һәм перспективалары хаҡында Өфө ҡала округы Советы рәйесе Евгений Александрович СЕМИВЕЛИЧЕНКО менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**Евгений Александрович, Рәсәйҙең һуңғы йылдарҙағы урындағы үҙидара үҫешендә ниндәй төп тенденцияларҙы билдәләп үтергә була?**

- Урындағы үҙидаралыҡ өлкәһенә ҡағылышлы ҡануниәттең федераль кимәлдә әленән-әле үҙгәреп тороуы төп тенденцияларҙың береһе булып ҡала. Миҫал өсөн әйткәндә, 2003 йылда Дәүләт Думаһы тарафынан ҡабул ителеп, тулыһынса 2009 йылда үҙ көсөнә ингән "Рәсәй Федерацияһында урындағы үҙидаралыҡты ойоштороуҙың дөйөм принциптары" Федераль законы 114 тапҡыр үҙгәртелде. Федераль ҡануниәттәге үҙгәрештәр төбәк һәм муниципаль норматив-хоҡуҡи акттарҙы ла яңынан ҡарап сығыу мөһимлеген тыуҙыра бит. Мәҫәлән, 2005 йылдың декабрендә ҡабул ителгән ҡаланың төп документы - ҡала округы Уставын Өфөнөң депутаттар корпусы 11 тапҡыр үҙгәртергә мәжбүр булды. Һуңғы тапҡыр Устав ағымдағы йылдың ғинуарында раҫланды. Үҙгәртеүҙәр, башлыса, өфөләрҙең яңы ҡағиҙәләр буйынса йәшәүен хәл итеүгә түгел, ә федераль закондарҙың үҙгәреүенә бәйле. Муниципалитеттар яңы талаптарға яраҡлашып та өлгөрмәй, яңылары барлыҡҡа килә. Әйтергә кәрәк, был тик Өфөгә генә ҡағылған мәсьәлә түгел, ә Рәсәйҙең барлыҡ төбәктәре, ҡалалары һәм ауылдары өсөн хас проблема.

(Дауамы 4-5-се биттәрҙә).

12+

✓ *Ошо йолаларҙы башҡарыуға ярҙам күрһәткән Күгәрсен районы хакимиәте башлығы Ф. Мусинға, Күгәрсен районы башҡорттары ҡоролтайы етәксеһе Г. Искәндәроваға, "Ағинәйҙәр ҡоро" ағзаларына оло рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ.*



*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

# ТАРИХИ БЕЛЕМЕБЕҘҘЕ...

## камиллаштырыр баҫма

**Бөгөнгө көн менән генә йәшәп булмай. Бындай йәшәүҙең мәғәнәһе лә, әһәмиәте лә, ҡыҙығы ла юҡ. Бөгөнгөбөҙ иртәгәге көнгә нигеҙ һалһа, үткәнебеҙ бөгөнгөнө барлыҡҡа килтергән. Тимәк, бер-береһенә тығыҙ бәйләнгән һәм берҙәй мөһим булған өс тармаҡтың ептәре өҙөлмәһен өсөн һәр кем хәленән килгәнде эшләргә тейеш. Ошо йәһәттән республикабыҙҙың абруйлы баҫмаларының береһе "Киске Өфө" гәзите баһалап бөткөһөҙ эш башҡара.**

Гәзит битендә баҫылған мәҡәләләр бөгөнгө көндәге ваҡиғаларҙы һүрәтләү менән генә сикләнмәй, тарихи замандарға ла алып ҡайта һәм хатта киләсәккә лә фараздар ҡылырға мөмкинлек бирә. Михаил Ломоносовтың "Үҙенең тарихын белмәгән халыҡтың киләсәге юҡ", тигән һүҙҙәре һәр кемебеҙҙең ҡолағында яңғырап, зиһенен быраулап торорға тейеш тә бит, тик әҙҙәр генә был хәҡиҡәтте иҫенән сығармай һаҡлай. Шуға күрә, "Киске Өфө"лә баҫылған тарихи мәғлүмәттәр бик урынлы һәм ваҡытлы. Төрлө сығанаҡтарҙан алынған һәм уҡымлы итеп бирелгән был мәҡәләләр гәзитте байытып ҡына ҡалмай, ә күптәрҙең тарихи белемен камиллаштыра, тулыландыра.

Баҫманы күңелемә яҡын итеүсе сираттағы өҫтөнлөк - замандаш яҙыусыларыбыҙҙың бай йөкмәткеле, тәрән фекерле, ҡыйыу яҙылған һәм бөгөнгө көндө сағылдырған әҫәрҙәрен бирә барыуы. Ундағы геройҙарҙың яҙмышында үҙеңдең йә булмаһа берәй танышыңдың ғүмер тарихын күргәндәй булаһың, сөнки беҙ ҙә улар ҡайнаған тормошта йәшәйбеҙ, шул уҡ ҡаҙанда ҡайнайбыҙ. Әҫәрҙәрҙең ҡыҙыҡлы, ғибрәтле, уйландырырлыҡтары баҫылыуы, ләкин шул уҡ ваҡытта сурытып яҙылған, сюжет линияһы ялҡытып оҙон-оҙаҡҡа һуҙылған ижад емештәренән азат булыуы ла "Киске Өфө"гә мәртәбә генә өҫтәй.

Башҡортостандан ситтә йәшәгән милләттәштәребеҙҙең йәшәйеше менән таныштыра барыуы гәзиттең тағы ла бер үҙенсәлеге. Тыуған яғынан ҡырҙа, төрлө милләт араһында үҙенең булмышын юғалтмай, тамырҙарын ҡоротмай көн итеүсе һәм оло ҡаҙаныштарға өлгәшкән башҡорт егеттәре һәм ҡыҙҙары тураһында уҡыу күңелгә май булып ята. Үҙенең әйтер һүҙе, күрһәтер эше булған, йәмғиәткә файҙа килтереүсе ғәмәлдәргә күмелеп йәшәүҙәре уларҙы халҡыбыҙҙың ғорурланырлыҡ балалары итә. Артабан да "Киске Өфө" ошо йәһәттән эшен туҡтатмаҫ, тигән өмөттә ҡалам.

Гәзиттә баҫылған бәләкәй, әммә йөкмәткеле, фәһемле һәм кәрәкле рубрикалар ҙа урынлы һәм ваҡытлы бирелә. Улар исемлегенә "Халыҡ дауаһы", "Йолаларыбыҙ", "Башҡорт ҡамусы", "Әйҙә, аҡса эшләйек!" һәм башҡа рубрикаларҙы индерер инем. Уларҙың береһен дә уҡымайынса үтеп булмай, һәр һан һайын көтөп алаһың һәм оло ҡыҙыҡһыныу менән танышаһың.

Икмәктең ашар ризыҡ булып өҫтәлгә килеп етеүе артында ниндәй ауыр һәм оҙайлы юл торһа, гәзит сығарыу ҙа оло сыҙамлыҡ, рухи байлыҡ, мәғлүмәтлелек, зыялылыҡ талап итеүсе ҙур хеҙмәт. Баҫма халыҡ араһында танылыу яулаһын, милләт тарафынан хөрмәткә лайыҡ булһын өсөн ниндәй етди көс түгелеүен баҫма хеҙмәткәрҙәре генә аңлап-беләләр. Беҙгә, гәзит уҡыусыларға, ошондай "тәмле", "туҡлыҡлы", күңелдәрҙе байытыр рухи аҙыҡ әҙерләүегеҙ өсөн рәхмәт һүҙҙәремде еткерәм.

**Рәсүл ХӘКИМОВ.**
**Өфө ҡалаһы.**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*



**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

# ХАЛЫҠ МЕНӘН ХӨКҮМӘТ...

## бер төптән эшләһен ине

**Дауыт АМАНГИЛДИН, Ырымбур ҡалаһы, инженер, Айҙар Байыҡ сәсән исемендәге Республика сәсәндәр бәйгеһе ҡатнашыусыһы:** Халҡыбыҙҙың берҙәмлеге үҙ-ара татыулыҡта, ярҙамсыл булыуҙа ғына түгел, етәкселәр менән ябай халыҡ араһындағы яҡшы мөнәсәбәттә лә сағылырға тейеш. Донъялағы иң алға киткән илдәрҙе миҫал итеп алһаҡ, уларҙа йәшәгән халыҡтарҙың үҙенең юридик хоҡуҡтарын белеүен, ябай эшсенең дә үҙ мәнфәғәттәрен яҡларға әҙер тороуын, иң мөһиме, хөкүмәт етәкселәренең халыҡ фекеренә ҡолаҡ һалырға, ышанысын аҡларға тырышып тороуын күрәһең. Халыҡ уларҙа бер ниндәй ваҡиғанан дә ситтә ятып ҡалмай, һайлауҙарға әүҙем йөрөй, тәнҡитен дә, хуплау һүҙҙәрен дә асыҡтан-асыҡ белдерә.

Беҙ ҙә бөгөн, элекке замандарҙағы кеүек, хоҡуҡтарыбыҙҙы ҡылыс болғап даулап йөрөй алмайбыҙ, тимәк, үҙ хоҡуҡтарыбыҙҙы, Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан Республикаһының Конституцияларын, төрлө закондарҙы яҡшыраҡ өйрәнергә кәрәк. Шул саҡта илдә алдаҡ булмаҫ, ялғандан - дөрөҫлөктө, ямандан яҡшыны айыра белергә өйрәнербеҙ. Унан һуң, беҙ башҡаларҙан талап итергә беләбеҙ, ә бына үҙебеҙ ни эшләйбеҙ һуң донъяла ғәҙеллек тантана итһен өсөн? Млләттәштәр үҙҙәре лә яман эштәрҙән, насар ҡылыҡтарҙан ары торһон ине. Белемле, аңлы, эшсән булһаҡ, төрлө яҡлап үҫешһәк, ығы-зығыларға бирешеп, аңҡы-тиңке йөрөмәһәк, отолмаҫбыҙ.

**Камила ҒӘЛИЕВА**
**яҙып алды.**

*ТУҠТА, МӘЛ!*

# БЕҘ ҘӘ БАЙРАМ ИТТЕК

Әйе, беҙ, журналистар ҙа байрам итәбеҙ ҡайһы саҡта. Башҡортостандың Матбуғат көнө уңайынан, мәҫәлән, йыл да тәбиғәт ҡосағында "Журфест" фестиваленә йыйылабыҙ. Был юлы ул республиканың күркәм урындарының береһендә - Күгәрсен районының "Мораҙым тарлауығы" тәбиғәт паркында ойошторолдо. Сараға республика, район гәзит-журналдары, радио, телевидение һәм интернет-баҫмалар хәбәрселәре йыйылды. Быйылғы сара ШОС һәм БРИКС илдәре мәҙәниәттәренә арналды һәм журналистарыбыҙ төрлө милләт кейемдәрен кейеп, уларҙың йырҙарын йырлап, бейеүҙәрен бейеп күрһәтергә тип, сәхнәгә дәррәү күтәрелде.

Ә "Киске Өфө" гәзите редакцияһы коллективы һәм Күгәрсен районы ағинәйҙәре һөйөклө Башҡортостаныбыҙҙы, башҡорт халҡының милли мәҙәниәтен кәүҙәләндерҙе (һүрәттә). Күгәрсен районы хакимиәте ҡуйған тирмәлә башҡорт ашһыуҙары менән табын ҡороп, ҡунаҡтарҙы һыйлау ҙа беҙҙең өлөшкә төштө. Ошо матур йолаларҙы башҡарыуға ихлас ярҙам күрһәткән Күгәрсен районы хакимиәте башлығы Фәрит Мусинға, Күгәрсен районы башҡорттары ҡоролтайы етәксеһе Гөлфиә Искәндәроваға, "Ағинәйҙәр ҡоро" ағзаларына оло рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ.



*"Киске Өфө" Күгәрсен ағинәйҙәре менән. (Мораҙым Мөхәмәтов фотоһы).*

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Ил Президенты Владимир Путин "Башнефть" компанияһының 25 процент акцияларын Башҡортостанға тапшырыу тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы. Рәсәй Хөкүмәтенә ике ай эсендә "Башнефть" компанияһының 38 128 551 ябай акцияларын һәм 6 280 076 өҫтөнлөклө акцияларын Башҡортостан Республикаһы милкенә тапшырыуҙы тәьмин итеү бурысы йөкмәтелде.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов республика делегацияһының XIX Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумында ҡатнашыуына йомғаҡ яһап, XIX Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумы сиктәрендә "Газпром" асыҡ акционерҙар йәмғиәте идараһы рәйесе Алексей Миллер, Рәсәйҙең ауыл хужалығы министры Александр Ткачев менән эшлекле осрашыуҙар үткәреүен, Карелия Республикаһы һәм Новосибирск өлкәһе менән сауҙа-иҡтисади, фәнни-техник, социаль һәм мәҙәни хеҙмәттәшлек тураһында килешеүҙәр төҙөлөүен, "Европа - Көнбайыш Ҡытай" халыҡ-ара транспорт маршрутын асыу сиктәрендә хеҙмәттәшлек һәм мәғлүмәт менән алмашыу тураһында килешеүгә ҡул ҡуйылыуын билдәләне.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов "Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһе Хёндэ Мотор" компанияһының генераль директоры Ку Йон Ги менән осрашты. Яҡтар Өфөлә үтәсәк ШОС һәм БРИКС саммиттары ваҡытында транспорт менән тәьмин итеү мәсьәләләрен тикшерҙе. "Беҙ тапшырған 232 машинаның ошо сараның рәсми автомобилдәре булыуы - беҙҙең өсөн ҙур хөрмәт.Саралар юғары кимәлдә үтер, автомобилдәребеҙ быға үҙ өлөшөн индерер, тип ышанабыҙ", - тине Ку Йон Ги.

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың 21-се ултырышы булып үтте. Яҙғы сессиялағы һуңғы ултырыштың көн тәртибенә 60-ҡа яҡын мәсьәлә индерелде. "Башҡортостан Республикаһында этил спиртын, алкоголле һәм спиртлы продукция етештереү һәм уларҙың әйләнеше өлкәһендәге эшмәкәрлекте көйләү тураһында"ғы Законға үҙгәрештәр индереүҙе күҙ уңында тотҡан проект закон статусын алды. Уның буйынса, республикала аҙ алкоголле, тонус күтәрә торған эсемлектәрҙе һатыуҙы тулыһынса тыйыу күҙ уңында тотола.

✓ *Профессор минән милләтемде, тыуған илемде һорашты. Милләтем башҡорт икәнен ишеткәс: "Бәй, һин бит Салауат Юлаев тоҡомо! - тип ҡысҡырып уҡ ебәрҙе. - Был ҡыҙыҡай бирешеп тормаҫ, ул башҡорт бит!" - тип тә өҫтәне.*



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Йәштәрҙе әрләү, тәнҡитләү һәр быуын кешеләренең теленән төшмәй торған бер ғәҙәт. Ә бына һеҙгә йәштәрҙең ҡайһы яғы оҡшай һәм оҡшамай?



(Башы 1-се биттә).

***Радик ӨМӨТКУЖИН, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Әбйәлил районы:*** Хәҡиҡәт сағыштырыуҙа күренә, тиҙәр. Бөгөнгө йәштәрҙе аңлар өсөн мин уларҙы гел генә үҙебеҙҙең быуын йәштәре менән сағыштырып ҡарайым. Беҙҙең быуын көслө идеологик баҫым аҫтында формалашты: беҙҙең өсөн уйланылар, беҙҙең өсөн хәл иттеләр, тип әйтергә кәрәк. Бөгөнгө йәштәр бындай "бәхеттән" азат. Улар үҙҙәре нисек теләй - шулай йәшәй, нисек теләй - шулай уйлай. Бындай азатлыҡтың ҡыйын, уңайһыҙ яҡтары ла бар: эшең барып сыҡһын, тиһән, тырышырға, үҙаллылыҡ һәм дә инициатива күрһәтергә, яуаплылыҡ тойғоһона эйә булырға кәрәк. Хәҙерге йәштәр белә: уларға эште лә, фатирҙы ла килтереп бирмәйәсәктәр, бөтөнөһөнә лә үҙеңә өлгәшергә, ынтылырға тура киләсәк. Ә бит беҙҙең заманда бөтөнләй киреһе ине: уҡып бөтһәң, йүнәлтмә менән эшкә барып урынлашаһың. Бер нисә йыл эшләһәң, фатирын да биреп ҡуялар. Эшендә лә хатта абруйлы берәй тәжрибәле кеше һинең өсөн яуаплылыҡ алып, кәңәшсе-тәрбиәсе булып йөрөй әле бераҙыҡ. Ошо йәһәттән бөгөнгө йәштәрҙең үҙаллы булыуҙары оҡшай миңә. Тик уларҙың ана шул үҙаллылыкты дөрөҫ йүнәлеште файҙаланыуҙары ғына шарт.

Унан тағы ла беҙҙең быуын йәштәренең эскелеккә мөнәсәбәте бөгөнгөләрҙекенән айырылып тороуы күҙгә ташлана. Элек "мәҙәни" эске күренештәре ҡәҙимге хәл итеп ҡаралһа, бөгөн йәмғәтселектә, ғөмүмән, эскелеккә ҡарата ҡәтғи кире ҡараш тыуҙырылып, айыҡ, сәләмәт тормош рәүеше өлгө итеп ҡаралған мәлдә йәштәребеҙҙең дә ошо өлгөнө үҙ итеүе, күптәренең дин юлына баҫыуы күңелгә ятышлы. Шуға күрә лә мин, "йәштәребеҙ тегеләй-былай" тип, уларҙан ғәйеп эҙләүҙән алыҫыраҡ торорға тырышам. Уларға аҡыл өйрәтеүҙән элек һәр кем үҙенең йәш саҡтарын иҫкә төшөрөп алһын ине: әйәрҙәме икән ул үҙе кеше аҡылына? Аҡыл өйрәткәнсе, матур ғына итеп өлгө күрһәтеп йәшәүең күпкә тәьҫирлерәк буласаҡ йәш кеше өсөн. Бөгөнгө йәштәребеҙҙең үҙаллы, маҡсатлы, тырыш һәм иманлы булыуҙары оҡшай, тип әйтер инем. Ә оҡшамаған яҡтарын... иң тәүҙә беҙ үҙебеҙҙән эҙләйек, сөнки яҡшылыҡты ла, яманлыҡты ла улар беҙҙән күреп үҫә - шуны онотмайыҡ.

***Фирүзә ИШБИРҘИНА, хеҙмәт ветераны:*** Эйе, һәр быуын үҙ балаларын, йәғни йәштәрҙе, үҙ заманына ҡарағанда күпкә аҡыллыраҡ, белемлерәк, әүҙемерәк итеп күргеһе килә: йәштәрҙе тәнҡитләү, уларҙан ғәйеп эҙләү ғәҙәте ҡартлыҡ мыжыҡлығынан түгел, ә ана шунан - уларҙы тағы ла яҡшыраҡ итеп күрергә теләүҙән килә лә инде ул, тип уйлайым мин. Беҙҙең йәшлек, ысынлап та, бөтөнләй икенсе төрлө ихтимағи шарттарға тап килде. Бәхет булдымы был, бәхетһеҙлекме, тип бәхәс ҡороу был тәңгәлдә урынһыҙҙыр, тием. Һәр хәлдә, мин үҙемдең йәшлек йылдарымды бәхетһеҙ булды, дөрөҫ юлдан барманыҡ, тип әйтергә телем әйләнмәй. Хәйер, йәшлек һәр дайым да матур, ниндәй шарттарға ла ҡарамаҫтан, бәхетле һәм әүҙем саҡ бит ул! Беҙҙең йәшлек бына ошо йәһәттән айырыуса уңды, тиер инем, сөнки беҙ матур хыялдар менән йәшәнек кенә түгел, ә уға өлгәшә лә алдыҡ. Быны өсөн мөмкинлектәр киң ине. Теләгән кеше мораҙына ирешер саҡтар ине, тик тырышлыҡ ҡына кәрәк ине. Һәм беҙ тырыштыҡ та. Уҡыһаң, тырыш, тәртипле, итәғәтле булһаң, күнеләнде үҫтерә, дәртләндерә белделәр, ярҙам да иттеләр. Әйткәндәй, ниндәйҙер даирәләр шауҡымына бирелеп, алама юлға төшкәндәрҙән дә кеше яһарға тырыштылар. Бер кем дә һинең шәхси "биләмәңә" йөгонманы, үҙаллылығыңа арҡыры төшмәне - әлеге кеүек үк, бөтәһе лә үҙ ҡулыбыҙҙа ине. Әйтеүемсә, тик заманы ғына башҡа булды. Ә идеология... "Инкубатор себештәре" итеп тәрбиәләһә лә, "бер төрлө һәм бөтәһе кеүек" булырға өндәһә лә, насарлыҡҡа өйрәтмәне. Дөрөҫ, шундай тәрбиә алыуға ҡарамаҫтан, йәштәр барыбер бер төрлө генә булманы: карьеристары ла, наркоманы ла, стиляғаһы ла, намыҫлы "трудяғаһы" ла булды. Маҡтанып түгел, ғибрәт өсөн әйткәндә, үҙем ана шул "трудяға"ларҙың береһе булараҡ, бөгөнгө йәштәрҙә был айырылып торған сифат тип әйтә алмаҫ инем. Тура әйткән - туғанына ярамаған, тиһәләр ҙә, әйтәм: эшләргә лә, уҡырға ла яратмай бөгөнгө йәштәребеҙ. Бында мин яҡшы миҫал булырҙай бер нисә йәш кешене түгел, ә урта статистик йәш кеше образын күҙҙә тотам. Уҡыр ҙа, эшләр ҙә ине улар, бәлки, тик бәлә шунда - улар үҙҙәре ни теләгәнен белмәй, йә булмаһа тормоштоң мәғәнәһен, айышын аңлап етмәй. Аҙашҡан быуын, тип әйтке килә бөгөнгө йәштәр хаҡында.Бының менән мин йәштәрҙе ғәйепләргә ашыҡмайым, ғәйеп - йәмғиәтебеҙ ҡоролошонда, әлеге нигеҙе үҙгәреп, ергә ныҡлы ултырып өлгөрмәгән дәүләт ҡоролошонда. Дөрөҫ, күптәр юғары белем алырға, уҡырға ынтыла. Белемгә ынтылышты һис ғәйепләп булмай. Тик бына уҡыуҙы тамамлап, ҡулдарына диплом алып сыҡҡан йәштәрҙе ни көтә һуң бөгөн? Дипломды ситкә һалып ҡуйып, ҡайҙалыр һатыусы, менеджер, официант, таксист һ.б. шундай эшкә тотоноррға мәжбүр йәш белгестәрҙең байтағы. Бына шуныһы оҡшамай миңә, ә йәштәр түгел. Йәштәр - һәр заманда ла йәштәр: матурҙар, дәртлеләр, әүҙемдәр, илһөйәрҙәр... Тик илебеҙ ҙә һөйһөн, хәстәрләһен уларҙы, оло тормош юлына сығырға ярҙам итһен ине үҙ йәштәренә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИШАРА



# ТОҠОМОҢ ЕҢЕҮСЕЛӘРҘӘН - балаларыбыҙға һеңдерәйек ошоно

**Һабаҡташым Фәниә бер осрағанда: "Аҫылғужаның "Салауаттың йәше" романын һоҡланып уҡып сыҡтым. Романдағы боронғо халыҡсан башҡорт һөйләше бигерәк матур бит", - тип һөйләп торҙо.**

"Эйе, мин дә "Ағиҙел" журналының һәр һанын көтөп алып, ул романды уҡып барҙым", - тип яуапланым мин дә. Шул саҡ Фәниәм мут йылмайып: "Студент саҡта мин дә Салауат Юлаев булдым бит!" тип әйтеп ысҡындырҙы. Шунан һөйләп китте:

- Ҡапыл ғына килеп сыҡты был хәл. Мәскәүҙә икенсе курста уҡығанда ҡалҡан биҙе шешеп, бик ҡаты ауырып киттем дә, мине дауаханаға операцияға һалдылар. Операция алдынан оло йәштәрҙәге профессор һәр ауырыуҙы палаталар буйлап йөрөп ҡарап сыға икән. Бына ул минең яныма килде. Беҙҙең палата табибы, дәфтәрен асып, операцияға әҙерлек барышын уҡығас, профессор минән милләтемде, тыуған илемде һорашты. Өфө ҡалаһынан икәнемде ишеткәс: "Күргәнем бар, матур ҡала, тау башында балҡып тора ул", - тине. Ә минең милләтем башҡорт икәнен ишеткәс: "Бәй, һин бит Салауат Юлаев тоҡомо! - тип ҡысҡырып уҡ ебәрҙе. - Был ҡыҙыҡай бирешеп тормаҫ, ул башҡорт бит!" - тип тә өҫтәне. Операциянан һуң бер-ике көн гел йоҡлата торған укол ҡаҙайҙар - иң ауыр мәлде йоҡлап үткәрһен, тиҙәрҙер инде. Өсөнсө көнөнә баяғы профессор тағы ла беҙҙең палатаға килеп инде һәм: "Хәлдәрең нисек, Салауат Юлаев?" - тип һораны. Ауыр булһа ла, көс-хәл менән йылмайып, һәйбәт, тигән булдым. Ә сал сәсле профессор кескәй ҡулымды һаҡ ҡына һөйөп: "Әйттем бит, бирешеп тормаҫ был, тип, Салауат тоҡомо бирешә буламы!" - тине.

Фәниәнең был хәбәрен тыңлағас, күҙ алдымдан берәм-берәм батырыбыҙ менән бәйле ваҡиғалар үтте. Яков Протазанов төшөргән "Салауат Юлаев" кинофильмын иҫкә төшөрҙөм. Ул фильмды бөтә илебеҙгә күрһәтеп, барлыҡ милләт халҡының рухын күтәргәйнеләр бит. Ватан һуғышында генерал Шайморатов та яугирҙарҙы "Салауат тоҡомо еңелмәй!" тип дәртләндергән икәнен беләбеҙ. Салауатыбыҙ ҙа, Аҡмуллабыҙ ҙа, шағирыбыҙ Бабич та, һуңынан Шайморатов та иң ауыр мәлдәрҙә халҡыбыҙ рухын күтәреү өсөн "Башҡорттарым!" тип өндәшкән. Ошолар тураһында гел иҫтә тотоп, үҙебеҙҙең ғорур, ирек һөйөүсе милләт вәкилдәре булыуыбыҙҙы тойоп йәшәһәксе, тип уйланам гелән.

...Ул көндә Фәниәнән: "Ярты быуаттан артыҡ ваҡыт үтеп киткән, нисек онотманың "Салауат" булыуыңды?" - тип һорағайным, ул: "Үҙ илемдән алыҫта, Мәскәү янындағы төпкөл Орехово-Зуево ҡалаһында, башҡорт булып йәшәү ниндәй ғорурлыҡ икәнен ҡарт профессор ныҡлап аңыма һеңдерҙе бит, уны онотоп буламы ни!" - тип яуапланы.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Хөкүмәтендә Франция делегацияһы менән осрашыу булды. Делегацияны Францияның Рәсәйҙәге Гәзәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы вәкиле Жан-Морис Рипер етәкләй. Илсе Франция республикаға аграр комплекста йәш кадрҙар әҙерләүҙә ярҙам күрһәтергә әҙер булыуын, шулай уҡ француздарҙың малсылыҡты үҫтереү, орлоҡ әҙерләү һәм аграр секторҙың башҡа йүнәлештәре мәсьәләләрендә үҙ-ара килешеп эш итеү менән ҡыҙыҡһыныуын билдәләне. Ул шулай уҡ Өфө һәм республика хаҡында тәьҫораттары менән бүлеште, иҫке йорттарҙы яңыртыу барышына һоҡланыу белдерҙе.

✓6-10 июлдә Өфөгә инә торған төньяҡ-көнбайыш, көньяҡ йүнәлешендәге дөйөм ҡулланылыштағы автомобиль юлдары аша, шулай уҡ "Каменная переправа" күпере аша М-5 "Урал" юлында һәм "Дим" районы аша ҙур йөклө автотранспорт хәрәкәте ваҡытлыса сикләнә. Был осорға автотранспорттар өсөн төрлө урында тукталыштар билдәләнгән.

✓Башҡортостанда юғары төҙөлөш темптары һаҡлана, тип хәбәр итә Башҡортостанстат. Ведомство мәғлүмәттәре буйынса, ағымдағы йылдың ғинуар-майында сафҡа индерелгән торлаҡ күләме 881 мең квадрат метр йәки уҙған йылдың ошо уҡ осорона ҡарата 119,9 процент тәшкил иткән. Биш ай йомғаҡтары буйынса республика торлаҡты сафҡа индереү буйынса Волга буйы федераль округы төбәктәре араһында икенсе, йән башына торлаҡ төҙөү буйынса, Татарстандан һәм Ульяновск өлкәһенән ҡала, өсөнсө урында килә.

✓2014 йыл йомғаҡтары буйынса Башҡортостан социаль-иҡтисади хәле буйынса алдынғы 10 төбәк иҫәбенә инде. Рейтинг лидерҙары тип Мәскәү, Санкт-Петербург, Ханты-Манси автономиялы округы һәм Татарстан Республикаһы билдәләнгән. Рейтингта иҡтисад күләме, уның һөҙөмтәләлеге, бюджет һәм социаль өлкәләр иҫәпкә алынған.Тәүге унау исемлегенә шулай уҡ Ямал-Ненец автономиялы округы, Төмән, Сахалин һәм Һамар өлкәләре инә. Һуңғы урындарҙы Ҡалмыҡстан, Йәһүд автономиялы өлкәһе һәм Тыва биләй.

✓Саммиттар ваҡытында эшләйәсәк матбуғат үҙәге урынлашыу сәбәпле, 11 июлгә тиклем Зәки Вәлиди урамының Аксаков урамы боролошонан Ғафури-Пушкин урамдары боролошона тиклемге юл буйлап транспорт хәрәкәте туҡтатылды. Был участкала йөрөүсе йәмәғәт транспортының схемаһы ла үҙгәрҙе.

✓ ***Был процедураның асылы һәр өйгә уның янындағы ер биләмәһен беркетеүгә ҡайтып ҡала. Былдай ер биләмәһендә кешеләрҙең ризалығынан тыш бер кем дә төҙөлөш йәки башҡа төрлө эшмәкәрлек алып бара алмаясаҡ.***



*ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ!*

# ДЕПУТАТТАРҒА...

## йышыраҡ мөрәжәғәт итһен халыҡ

(Башы 1-се биттә).

**▸ Былдай тотороҡһоҙлоҡтоң сәбәбен нимәлә күрәһегеҙ һәм эштәрҙең ошолай булыуында кем ғәйепле? Ситуацияны нисек хәл итергә мөмкин?**

- Мәсьәләнең сәбәптәре асыҡ һәм был осраҡта ғәйеплеләрҙе эҙләү дөрөҫ булмаҫ ине. Беҙ үҙенсәлекле төбәктәрҙән торған ҙур илдә йәшәйбеҙ. Теге йәки был төбәктәге климат, милли, мәҙәни үҙенсәлектәр урындағы үҙидаралыҡтың эшмәкәрлегенә көслө йоғонто яһай. Шуға күрә закон ҡабул иткәндә барыһын да күҙ уңында тотоу мөмкин түгел һәм урындағы үҙидаралыҡҡа ҡағылған өлкәлә закондар ғәмәлгә ашырыу барышында шымартыла, камиллаштырыла. Шулай ҙа был йәһәттән ниндәйҙер тотороҡлоҡ күҙәтелеүен, ҡануниәт базаһының тотороҡло нигеҙгә таянған булыуын күрге килә. Әлеге ваҡытта беҙ нәҡ ошо процесты күҙәтәбеҙ, тип әйтергә мөмкин. Һуңғы бер-нисә йылда урындағы үҙидаралыҡ өлкәһендә булған мөһим ваҡиғаларҙың береһе, минеңсә, - Рәсәй Президентының 2013 йылда Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтендә сағылған үҙидаралыҡ ойошмаларын финанс йәһәттән нығытыу, уларҙың халыҡҡа нығыраҡ асылыуы, был өлкәләге ҡануниәтте камиллаштырыу тураһындағы күрһәтмәләре. Әлеге күрһәтмәләрҙе тормошҡа ашырыу башланһа ла, уның һөҙөмтәләре тураһында һөйләүе иртәрәк әле, сөнки был процесс үҙ эсенә бер-нисә йылды алған билдәле бер ваҡыт талап итә. Уларҙы бойомға ашырғандан һуң Рәсәйҙә юғары һөҙөмтәле, финанс йәһәттән ныҡлы һәм тотороҡло хоҡуҡи базалы урындағы үҙидаралыҡ ойошмалары барлыҡҡа киләсәк, тип ышанғы килә.

**▸ Тәжрибә күрһәтеүенсә, кеше күпселек осраҡта депутатҡа ул хәл итә алмаҫтай проблемалар менән мөрәжәғәт итә. Мәҫәлән, депутаттың фатир менән тәьмин итеү йәки ниндәйҙер матди ярҙам күрһәтеү мөмкинлеге юҡ. Ә Һеҙ һәм Һеҙҙең депутат хеҙмәттәштәрегеҙ өфөләргә нисек ярҙам итә ала?**

- Ысынлап та, күптәр беҙгә нәҡ фатир мәсьәләһен хәл итеүҙе һорап килә, ләкин беҙ фатир таратыу менән шөғөлләнмәйбеҙ. Кешенең һинән ярҙам өмөт итеп килгән ышанысын аҡлай алмауҙан, хатта ул мәсьәлә менән шөғөлләнергә тейеш булмаған осраҡта ла, үҙемде уңайһыҙ тоям. Шуға күрә, ҡала халҡына "Өфө ҡала Советы ҡарамағында торлаҡ фонд юҡ һәм беҙ, депутаттар, был йәһәттән бер ниндәй ҙә ярҙам күрһәтә алмайбыҙ. Ташламалы фатир алырға тейешле граждандар ғәмәлдәге ҡануниәт нигеҙендә сират буйынса алырға хоҡуҡлылар. Ә депутаттар иһә былдай осраҡтарҙа тик мәғлүмәти һәм хоҡуҡи ярҙам ғына күрһәтә ала, ә торлаҡты бүлеү һәм таратыу процесына беҙ йоғонто яһай алмайбыҙ", тип аңлатабыҙ. Дөрөҫөн әйткәндә, һайлаусылар беҙҙең компетенцияла булмаған һорауҙар менән йыш мөрәжәғәт итәләр һәм фатир мәсьәләһе берҙән-бер миҫал түгел. Ләкин беҙ былдай осраҡтарҙа ла кешене иғтибарҙан ситтә ҡалдырмайбыҙ, ә теге йәки был мәсьәләне ҡайҙа хәл итергә мөмкин икәнлеген аңлатабыҙ, кәрәк булған осраҡта төрлө ведомстволарға депутат запростары ебәрәбеҙ, тейешле мәғлүмәт йыйырға ярҙам итәбеҙ. Ә матди ярҙамға килгәндә, ҡала округы Советы депутаттары күпселек осраҡта ҙур күләмле финанс ярҙамы күрһәтә.

**▸ Күптән түгел беҙ Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығын билдәләнек. Ветерандар өсөн башҡарылған эштәргә ҡарап, Өфөбөҙҙә еңеүселәр быуынына булған оло хөрмәт тураһында фекер йөрөтөргә була. Ә депутаттар корпусы тарафынан ветерандарыбыҙ өсөн нимә эшләнде һәм нимәләр эшләнә?**

- Ағымдағы йылдың яҙында депутаттар Еңеү көнөнә арналған барлыҡ сараларҙа ла әүҙем ҡатнашты һәм шулай уҡ үҙҙәре лә төрлө инициативалар менән сығыш яһаны. Беҙ 36 һуғыш ветеранына ҡала округы хакимиәтенең Почет грамоталарын һәм "Ҡала алдындағы хеҙмәт өсөн" знактарын, аҡсалата премиялар һәм аҙыҡ-түлек магазины һәм дарыуханаларҙың сертификаттарын тапшырҙыҡ. Ләкин иң мөһиме - депутаттарҙың барыһы ла тиерлек ветерандарға матди ярҙам күрһәтеү һәм уларға төрлө байрам саралары уҙғарыу инициативаһы менән сығыш яһаны, уларҙы тормошҡа ашырҙы. Быйылғы яҙҙа ҡала Советы депутаттары ветерандар өсөн 11,5 миллион һум күләмендә аҡса бүлде. Шуларҙың 1,8 миллионы ветерандарҙың фатирҙарын ремонтлауға тотонолдо. Шулай уҡ ветерандарға бүләктәр алыуға һәм башҡа матди ярҙамға депутаттар 5,7 миллион, ә байрам сараларын уҙғарыуға - 4 миллион һум аҡса йүнәлтте. Мин бигерәк тә депутаттар Андрей Носков, Андрей Борисов һәм Андрей Егоровтарҙы билдәләп үтер инем. Улар үҙ аҡсаларына Тимашево ҡасабаһында Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары геройҙары иҫтәлегенә стела ҡуйҙы. Ә депутат Борис Герасимов Еңеү көнө уңайынан 100 ветеранға кафела матур байрам табыны ойоштorҙо. Депутаттар Филүс Ишбулатов һәм Иосиф Марач иһә 9 май көнөндә Якутов исемендәге паркта ветерандарға бүләктәр таратып, һый-хөрмәткә тулы табын ойоштorҙо.

**▸ Ә Һеҙ үҙегеҙ былдай мәрхәмәтлек сараларында нисегерәк ҡатнашаһығыҙ?**

- Беренсенән, маҡтанғым килмәй. Икенсенән, барлыҡ эштәрҙе лә бер үҙем түгел, ә һайлау округы буйынса коллегам, Башҡортостандың Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайы депутаты Александр Артюхов менән тығыҙ бәйләнештә башҡарыуымды һыҙыҡ өҫтөнә алғым килә. Мин "Өфө моторҙар етештереү берекмәһе"нең идара итеү директоры һәм Рәсәй машиналар төҙөү Союзының Башҡортостан төбәге бүлексәһе рәйесе вазифаларын башҡарыусы Александр Артюховтың ике урында ла урынбаҫары вазифаһын биләйем. Шуға күрә, завод һәм Союзмаш беҙ ойошторған бөтә шәфҡәтлелек сараларының төп бағыусылары булып тора. Мәҫәлән, ағымдағы йылдың яҙында беҙ ветерандарға ярҙам күрһәтеүгә бергәләп 6,2 миллион һум аҡса йүнәлттек. Шул иҫәптән 6 һуғыш ветеранының фатирында ремонт эштәре башҡарҙыҡ һәм меңләгән ветеранға финанс ярҙамы күрһәттек. "УМПО" асыҡ акционерҙар йәмғиәте бүлгән аҡсаға Инорс биҫтәһендәге йорттарҙың береһенә Советтар Союзы Геройы Георгий Мушниковҡа мемориаль таҡта һәм барельеф ҡуйыуҙы, уның батырлыҡтары хаҡында бәйән ителгән Иван Сотниковтың "Күк баһадирҙары" ("Витязи неба") китабын яңынан баҫтырып сығарыуҙы ла мөһим эштәрҙең береһе, тип һанайым.

**▸ Ҡала Советы депутаттарының төп эшенә әйләнеп ҡайтайыҡ. Быйылғы йылда депутаттар тарафынан ҡабул ителгән ниндәй ҡарарҙарҙы иң әһәмиәтлеһе тип һанайһығыҙ?**

- Беҙҙең ҡала өсөн генә түгел, ә республиканың барлыҡ муниципалитеттары өсөн берҙәй мөһим ике закон проектын беҙҙең депутаттар корпусы йыл башында Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ҡарамағына тәҡдим итте. Уның беренсеһе иғландар һәм башҡа төр рекламаны рөхсәт ителмәгән урындарға йәбештергән өсөн штрафты арттырырыу менән бәйле. Дәүләт Йыйылышы тарафынан беренсе уҡыуҙа был закон проекты ҡабул ителде һәм һуңғы сиктә ыңғай ҡарар сығарылһа, яңы штрафтар бөтә республика территорияһында ла ғәмәлдә буласаҡ. Был бик кәрәкле аҙым тип уйлайым, сөнки төрлө иғландар менән йәбештереп бөтөлгән бағана, йорт подъездары ишектәре, туҡталыш павильондары мәсьәләһе менән бер Өфө ҡалаһы халҡы ғына осрашмай, был проблема бөтә төбәктәргә лә хас күренеш.

Дәүләт Йыйылышы ҡарамағына беҙ тағы ла Өфө һәм Өфө районы сиктәрен үҙгәртеү тураһындағы закон инициативаһын сығарҙыҡ. Шуныһы ҡыуаныслы, беҙҙең инициатива тиҙ үк ҡаралды һәм республика парламенты тарафынан 28 майҙа уҡ хуплау тапты. Өфө өсөн яңы сиктәр принципиаль әһәмиәткә эйә. Беренсенән, беҙ ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары полигонын ҡала ситенә сығарыуға өлгәштек. Әгәр ҙә ошо мәсьәлә хәл ителмәһә, ҡалаға ҙур суммала штрафтар янар ине, сөнки федераль ҡануниәт былдай объекттарҙың кеше йәшәгән урындан ситтә булыуын талап итә. Икенсенән, баш ҡала льготалы категорияға инеүсе граждандарға шәхси йорт төҙөү өсөн бүлеп бирерлек өҫтәмә ер биләмәләре алды. Өфө районы иһә финанс яҡтан отто, сөнки элек Өфө ҡалаһы биләмәһендә урынлашҡан һәм һалымды ҡала бюджетына түләгән сәнәғәт предприятиелары район ҡарамағына күсте. Хәҙер уларҙың һалым аҡсаһы Өфө районы бюджетын тулыландырасаҡ.

Быйыл шулай уҡ беҙ ике яңы территориаль йәмғиәт үҙидаралығының сиктәрен раҫланыҡ. Ағымдағы йылдың 6 ғинуарында "Башҡортостан Республикаһының баш ҡалаһы - Өфө ҡалаһы статусы тураһында"ғы закон ғәмәлгә инде. Был закон проекты ла беҙҙең депутаттар корпусы инициативаһы менән барлыҡҡа килде. Был закон Ҡоролтай депутаттары менән берлектә уҙған йылда уҡ әҙерләнһә лә, быйыл ғына үҙ көсөнә инде. Уның әһәмиәте шунда - ул рәсми рәүештә Өфөгә республиканың баш ҡалаһы статусын һәм махсус, шул иҫәптән финанс хоҡуҡтарын бирҙе.

**▸ Яҡын киләсәктә ҡала округы Советы алдында ниндәй проблемаларҙы һәм бурыстарҙы атҡарыу бурысы тора?**

- Проблемалар юҡ, ә хәл итеүҙе талап иткән бурыстар бар. Миҫал өсөн Өфөнөң Генераль планын килтерәм. Ул әлеге көндә үк яңынан ҡарап сығыуҙы һәм төҙәтмәләр индереүҙе талап итә. Был эште беҙ ҡала хакимиәте менән бергә атҡарып сығырға тейешбеҙ. Шулай уҡ ағымдағы йылдың июленән ҡала Советы комиссияһы иңенә асыҡ тыңлауҙар үткәреү бурысы ла ятасаҡ. Ҡалала биләмәләрҙе межалау эштәре үткәрергә кәрәк. Был процедураның асылы һәр өйгә уның янындағы ер биләмәһен беркетеүгә ҡайтып ҡала. Былдай ер биләмәһендә кешеләрҙең ризалығынан тыш бер кем дә төҙөлөш йәки башҡа төрлө эшмәкәрлек алып бара алмаясаҡ. Биләмә хужалары ерҙе үҙҙәре теләгәнсә ҡулланыу мөмкинлеге аласаҡ. Шулай итеп, алда бөтә ҡаланы межалау кеүек оло эш тора һәм асыҡ тыңлауҙар ҙа күпләп уҙғарыласаҡ. Мәҫәлән, Советтың яҡын арала буласаҡ ултырышында ошондай 10 тыңлау үткәрергә иҫәп тотабыҙ.

**▸ Ҡаланың алдағы биш йыллыҡ үҫешен нисек күҙаллайһығыҙ?**

- Фантазияға бирелмәйенсә, күҙаллауҙар эшләгем килә. Өфө-

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов етәкселегендәге спортсылар делегацияһы Голландияның Алкмар ҡалаһына 49-сы Халыҡ-ара балалар уйындарына китте. Баш ҡаланың 14 уҡыусыһы дзюдо, еңел атлетика, спорт гимнастикаһы һәм волейбол буйынса ярыштарҙа ҡатнашасаҡ.

✓Өфөлә 6-9 июлдә иртәнге 6-нан киске 24 сәғәткә тиклем Октябрь проспектының Көньяҡ юл үткәргесенән Төньяҡ юл үткәргесенә тиклемге 118-се йорттан 122-се йортҡа тиклемге участка юл хәүефһеҙлеген тәьмин итеү маҡсатында ябыласаҡ. Ҡала округы хакимиәте ваҡытлыса уңайһыҙлыҡтар өсөн ғәфү үтенә һәм автомобиль йөрөтөүселәргә башҡа маршрут һайларға кәңәш итә.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте, "Вся Уфа" телеканалы һәм Өфөнөң "Регион-Видео" студияһы көсө менән Өфө тураһында презентацион фильм төшөрөлдө. Баш ҡала иҡтисады, мәҙәниәте, дине, спорты һәм мәғарифы тураһында һөйләүсе фильм тамашасы 10 минут эсендә Өфөнөң рухын, һулышын тойорлоҡ кимәлдә ижад ителгән.

✓Өфө-Аэропорт юлында аномаль эҫе тәьҫирендә һәм ҙур йөклө автотранспорт баҫымы аҫтында асфальт юлдың өҫкө ҡатында ҡайһы бер деформациялар барлыҡҡа килгәйне. Әле ул участкаларҙа ремонт эштәре бара. Ҙур йөклө автотранспорт хәрәкәте 31 июнгә тиклем туҡтатылды.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов "Өфө - яратҡан ҡалам" тигән фотоконкурста еңеүселәрҙе тәбрикләне. "Имидж-Консультант" компанияһы менән берлектә ойошторолған конкурс профессиональ фотохудожниктар араһында ла, һәүәҫкәрҙәр араһында ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы, уларҙан меңләп эш ҡабул ителде. Алексей Гиндуллин - Гран-при (50 мең) яуланы. Төрлө номинацияларҙа тағы ла 9 кеше 1-се, 2-се, 3-сө урындарға һәм аҡсалата премияларға (25, 15, 10 мең) лайыҡ булды.

✓"Дуҫлыҡ" монументы районындағы Ағиҙел аша күпер тағы ла өс һыҙатҡа киңәйәсәк. Транспорт һәм юл хужалығы буйынса Дәүләт комитеты Ильяс Мөниров әйтеүенсә, әле булған ике күпер араһында махсус ҡушымта юл үткәргес төҙөләсәк.

лә, Дим һәм Затон биҫтәләре араһында яңы эре биҫтә барлыҡҡа киләсәк, тип көтөлә. Унда 15-20 мең кеше йәшәйәсәк. Ҡала "УЗЭМИК" заводынан "колаҡ" ҡағасаҡ. Уның урынында бейек ҡатлы йорттар, мәктәп, ҡунаҡхана, магазиндар, балалар баҡсалары төҙөләсәк. Был һорау буйынса ҡарар ҡабул ителгән һәм оҙаҡламай бойомға ашырыла башлаясаҡ. Өфөгә үҙгәнән сәнәғәт ойошмаларын ситкә күсереү эше артабан да дауам итәсәк һәм барыһы ла бер юлы һәм тиҙ эшләнмәһә лә, уны хәл итергә кәрәк. Шулай уҡ Инорс биҫтәһе лә ҙурайясаҡ һәм киңәйәсәк, тип уйлайым. Үҙем депутат булараҡ ошо биҫтәлә эшләгәнгә күрә, уны төҙөү проекттары менән яҡшы танышмын.

Муниципалитет ҡарамағында Сипайлово биҫтәһенән Октябрь проспектына тиклем һуҙыласаҡ канат юлы проекты бар. Ул да алдағы йылдарҙа ғәмәлгә ашырыласаҡ, тип уйлайым. Шулай уҡ Галле округы урамы ҡапҡаһы янындағы Ағиҙел йылғаһы аша күперҙең һәм юл үткәргестең дә проекттары тормошҡа ашыуын күргe килә.

Күп прогноздар эшләмәҫкә ине, сөнки ҡала халҡының уны вәғәҙә кеүек ҡабул итеүе лә бар. Өфөләге төп үҙгәрештәрҙе мин төҙөлөш эштәре менән түгел, ә өфөләрҙең уҙаныдағы үҙгәреш менән бәйләйем. Яҡын киләсәктә ҡала халҡының урындағы үҙидаралыҡ һорауҙары мәғлүмәтлерәк һәм яуаплыраҡ булыр, тип ышанам. Уларҙың йорттары, ишек алды, биҫтә менән идара итеүҙә туранан-тура ҡатнашыуҙарын һәм үҙҙәренең тәҡдимдәре менән беҙгә, депутаттарға, йышыраҡ мөрәжәғәт итеүҙәрен күргe килә, сөнки урындағы һорауҙарҙы депутаттар йәки муниципаль хеҙмәткәрҙәр генә түгел, ә бөтә халыҡ берғәләшеп хәл итергә тейеш. Был хаҡта Рәсәй Федерацияһы Конституцияһында ла, 131-се Федераль законда ла асыҡ әйтелгән. Ләкин беҙҙә халыҡ бығa күнекмәгән - улар кемдер килеп, уларҙың бөтә һорауҙарына яуап бирер, проблемаларын хәл итеп китер, тип көтә. Шулай ҙа был йәһәттән хәлдәр яйлап яҡшыра бара. Халыҡ ойошма, йорт комитеттарына берләшә, территориаль йәмәғәт үҙидаралығы булдырырға тырыша. Әлегә былдай кешеләр әҙ, тик уларҙың һаны арткандан-арта бара. Һәм был бик һәйбәт тенденция.

**Зөлфиә БАСИРОВА,**
**Гөлназ МАНАПОВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**Ошо көндәрҙә Өфө ҡала округы хакимиәтендә ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Биктимер улы Баязитов быйыл баш ҡала мәктәптәрен тик "бишле"гә тамамлаған, "Уҡыуҙағы ҙур уңыштары өсөн" миҙалы менән бүләкләнгән, йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнашҡан, төрлө олимпиадаларҙа еңеү яулаған 50 егет һәм ҡыҙ менән, шулай уҡ уларҙың уҡытыусылары, ата-әсәләре, Өфө районларының мәғариф бүлектәре начальниктары менән осрашты.**

# ЯҠШЫ БЕЛГЕСТӘР БУЛЫП...

## Өфөбөҙгә ҡайтығыҙ!



- Быйыл баш ҡала мәктәптәрен 5 меңдән ашыу уҡыусы тамамланы, - тине үҙ сығышында Сынтимер Биктимер улы. Уларҙың күбеһе киләсәктә кем булырын аныҡ күҙаллай. Берҙәм дәүләт имтихандары үтте, алда - сығарылыш кисәһе. Ә бөгөн был осрашыуға беҙ ғүмерҙәрендәге иң тәүге ҙур уңышына хаҡлы рәүештә ғорурлана алған тырыш уҡыусыларҙы йыйҙыҡ. Ошондай егеттәр, ҡыҙҙарҙың йылдан-йыл күберәк була барыуы айырыуса ҡыуандыра беҙҙе. Уларҙың уңыштары уҡыусыларҙың, уҡытыусыларҙың, ата-әсәләрҙең ҡумәк, берҙәм хеҙмәт емеше. Беҙ баш ҡалабыҙҙа үҙебеҙгә ышаныслы, лайыҡлы алмаш тәрбиәләнгән мәктәптәр, гимназиялар, лицейҙар менән дә ғорурланабыҙ...

Артабан Сынтимер Биктимер улы Өфө ҡалаһының уңыштары менән таныштырҙы. Атап әйткәндә, Өфөнөң финанстар менән идара итеү буйынса Рәсәйҙә иң яҡшы ҡала булыуын, инвестициялар өлкәһендә ыңғай хәрәкәт һаҡланыуын, мәҙәниәткә ҙур иғтибар бирелеүен һыҙыҡ өҫтөнә алды. Урынбаҫарҙың сығышында яңғыраған фекерҙәрҙе артабан күрһәтелгән видеояҙма ла йөпләп ҡуйҙы. Уҡыусылар һәм башҡа ҡунаҡтар Өфө ҡалаһының тарихын, бөгөнгөһөн һәм киләсәген сағылдырған матур презентация-видеояҙма менән ихлас таныштылар.

Байрамса биҙәлгән, тантана бөркөлөп торған ҡала хакимиәте залына килгән йәш ҡунаҡтар был көндә Сынтимер Биктимер улы ҡулынан Ирек Ялаловтың ҡотлау һүҙҙәре яҙылған хатын алып та ҡыуанды. Был хатта: "Ҡәҙерле сығарылыш уҡыусыһы! Мәктәпте уңышлы тамамлауығыҙ һәм оло, үҙаллы тормошҡа аяҡ баҫыуығыҙ менән ҡотлайым һеҙҙе! Был тормошта үҙ юлығыҙҙы табырһығыҙ, тип ышанам. Иң мөһиме - үҙ көсөңә ышаныу, киләсәккә ышаныс менән бағыу, осраясаҡ ауырлыҡтарға һыр бирмәй, һәр башланғыста үҙегеҙҙең иң яҡшы һыҙаттарығыҙҙы ғына күрһәтеү. Баш ҡаланың артабан сәскә атыуы һеҙҙән тора. Һеҙгә ысын күңелдән тормошта ышаныслы дуҫтар һәм ҡуйған маҡсаттарығыҙға өлгәшергә ярҙам итер уңыштар юлдаш булыуын теләйем", - тигән тәбрикләү һүҙҙәре, ихлас теләктәр бар.

Сараға килгән 5 тиҫтә алдынғы уҡыусының һәр береһе үҙенсә талантлы икәненә шаһит булынды. Һәр баланы уртаға саҡырған сакта уның уҡыуҙа, спортта, фәндә, ижадта, йәмәғәт эштәрендә ниндәй уңыштарға өлгәшеүе, уҡыу алдынғыһының киләсәккә хыялдары, ниндәй һөнәр һайларға теләүе уҡып ишеттерелде. 2015 йылда мәктәпте уңышлы тамамлаған йәштәр араһында табип, төҙөүсе, геолог, астрофизик, яҙыусы, ғалим, физик-ядерсы, архитектор һәм... РФ Президенты булырға теләүселәр ҙа бар ине. Киләсәккә яҡты өмөттәр менән ҡараған уҡыусылары, йәштәре булған илдең генә бөгөнгөһө ныҡлы нигеҙле, киләсәге ышаныслы булалыр ул. Хәйер, уҡыусылар темаһына әйләнеп ҡайтайыҡ. Улар араһында шулай уҡ, федераль кимәлдәге олимпиадалар еңеүселәре, спорт мастерлығына кандидаттар, БР Президенты, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы стипендиаттары, төрлө әҙәби конкурстар лауреаттары барлығы ла һөйөндөрҙө, әлбиттә. Киров районының 16-сы мәктәбе уҡыусыһы Зарема Бакирова, мәҫәлән, туплы хоккей буйынса беренсе үҫмерҙәр разрядын, ҡыҙҙар араһында футбол буйынса - БР, туплы хоккей буйынса РФ беренселеге еңеүсеһе, фигуралы шыуыу буйынса Рәсәй ярышында - 3-сө, заманса бейеү йүнәлештәре буйынса Рәсәй конкурсында 2-се урын яулаһа, Гүзәл Әлибаева ла, Киров районының М.Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы уҡыусыһы, бик күп уңыштарға өлгәшкән. Ул "Чистая наука" республика фәнни-ғәмәли конференцияһында - 2-се, "Тормош һабаҡтары" фәне буйынса республика олимпиадаһында - 1-се, инглиз теле буйынса бөтә Рәсәй кимәлендә уҙғарылған "Интеллект-экспресс" асыҡ конкурсында - 2-се урын яулаған, "Шаяниум" отҡорҙар һәм зирәктәр конкурсында "Тамыр" телеканалы ойошторған махсус бүләккә, туған телдәр, Башҡортостан мәҙәниәте һәм тарихы буйынса асыҡ республика олимпиадаһында юғары һөҙөмтә күрһәткәне өсөн маҡтау ҡағыҙына лайыҡ булған, быйыл башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиадала ла призлы урын яулаған. Гүзәл Әлибаева менән "Берҙәмлек" лицейын тамамлаусы Айрат Молҡамановҡа һабаҡташтары исеменән сығыш яһау хоҡуғы ла бирелде. Гүзәл үҙ сығышында: "Киләсәктә кәрәкле һөнәрҙәргә эйә булып, Башҡортостаныбыҙҙың мәртәбәһен үҫтереүгә үҙ өлөшөмдө индерһәм, мин бик бәхетле булыр инем", - тиғән киҫерештәре менән ихлас уртаҡлашһа, Айрат: "Беҙ баш ҡалабыҙҙың беҙгә бағлаған өмөттәрен аҡларға, Өфөнөң, Башҡортостандың үҫешенә үҙ өлөшөбөҙҙө индерергә тырышырбыҙ. Көн һайын һалған тырышлыҡ ҡына уңыш килтерә. Ошоно сағылдырған бүләгебеҙ ҙә бар", - тине һәм бүләкте Сынтимер Биктимер улына тапшырҙы.

"Хәҙерге балалар бигерәк аңлы", тигәйне бер танышым. Килешмәү мөмкин түгел. Әйтәйек, бер генә күҙәтеү: сара ваҡытында бер-нисә тапҡыр әйтелһә лә, кеҫә телефондарын һүндермәгән ололар осраны. Әлбиттә, был күҙәтеү республика кимәлендәге абруйлы баҫма биттәрендә урын алмаһа ла булыр ине, ләкин беҙгә ул күренештең шуныһы ҡиммәт: уҡыусылар яғынан былдай хатаға юл ҡуйылманы шикелле. Олораҡ быуын әле яңы аңғара башлаған мәғлүмәттәрҙе хәҙерге балалар күптән белә, кем әйтмешләй, "киптереп элгән" түгелме? Уларҙың зирәклегенә, һәр быуын вәкиленә хас булғанса, һоҡланырға ғына ҡала. Бәхетле булһын балалар! Үҙҙәрен борсоған проблемаларҙы хәл итергә тырышһын, заман һынауҙары алдында юғалып ҡалмаһын, тип теләге килә. Шул сағында тәүарих ҡуласабыҙ ҙа бер урында әйләнмәҫ, үҙ тиҙлеген ташламаҫ.

**ЙОМҒАҠЛАП...**

**Һүҙҙең аҙағында Сынтимер Биктимер улының һүҙҙәрен килтерге килә: "Һеҙ, ҡәҙерле сығарылыш уҡыусыларыбыҙ, хәҙер төрлө яҡтарға уҡырға китерһегеҙ. Күптәрегеҙ сит өлкәләрҙә, сит илдәрҙә белем алыр. Шулай ҙа һеҙ мотлаҡ рәүештә Өфөгә ҡайтырға, уны үҫтереүгә үҙ өлөшөгөҙҙө индерергә тейешһегеҙ. Беҙ һеҙҙең яҡшы белгестәр булып, тыуған ҡалабыҙға эшкә ҡайтыуығыҙҙы көтәбеҙ".**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Алкоголизм

❖ Кипкән ҡайын бөрөһөнә мул итеп шәкәр һибергә һәм яндырырға. Утты һүндерергә һәм ошо төтөндө еҫкәргә. Процедуранан һуң бер рюмка араҡы эсергә, был эске килеү теләген баҫасаҡ.

❖ Эсеүҙе, тартыуҙы ташларға теләгәндәр календула менән һоло төнәтмәһен ҡабул итһен. 3 литрлы кәстрүл алып, уның яртыһы тулғансы ҡабығынан таҙартылмаған һоло һалырға, кәстрүл тулғансы һыуыҡ һыу ҡойорға, ҡайнатып сығаргас, тағы ла 30 минут ҡайнатырға, һыуын һарҡытып алырға. Уға 100 грамм календула сәскәһе өҫтәп, одеялға төрөп, 10-12 сәғәт төнәтергә. Һеҙҙәргә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1-әр стакан эсергә.

## Аллергия

❖ Саңға, шул иҫәптән, китап саңына кире реакция булғанда: 4 өлөш һары мәтрүшкә, 5 өлөш һарыгүҙ (золотысячник), 3 өлөш бәпембәнең вакланған тамыры, 2 өлөш ҡырҡбыуын үләне (хвощ полевой), 1 өлөш кукуруз мыйыҡсалары (кукурузные рыльца), 1 өлөш аҡ сәскә, 4 өлөш вакланған гөлйемеш емешен ҡушып болғатырға. 4 ҡалаҡ үлән ҡатнашмаһына 1 стакан ҡайнап һыуыған һыу ҡойорға һәм төнгөлөккә ҡалдырырға. Иртән талғын утта ҡайнау хәленә еткерергә, уттан алырға, 1 сәғәт төнәтергә. Көнөнә өс тапҡыр стакандың 1/3 күләмендә эсергә. Дауаланыу курсы - 6 ай.

❖ 100 грамм күмергә 0,5 литр һөт ҡойоп, талғын утта 15 минут ҡайнатырға, төнө буйы төнәтергә. Ярты сәғәт һайын яртышар стакан эсергә. Күмерҙең дарыуханан һатып алынғанын түгел, ә усаҡта ут янғанда алынғанын ҡулланығыҙ.

❖ Бер ус болан мүгенә (руссаһы - ягель, тундра зонаһында үҫә) ҡайнап һыуыған һыу ҡойорға, 2 сәғәт төнәтергә, крандағы һыу аҫтында йыуырға, таҫтамалға һалып ҡороторға. Бынан һуң мүккә ярты литр һыу ҡойоп, 20 минут ҡайнатырға, һыуытырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда яртышар стакан эсергә.

❖ Диатез, тирегә сабыртма сыҡҡанда: ярты литр һыуға бер ҡап лавр япрағы һалып, 2 минут ҡайнатырға. Һыуытырға, һөҙөргә. Бәләкәй балаларға көнөнә 1-2 тамсы, өлкәнерәктәргә 10 тамсы ҡабул итергә. Тирегә көнө буйы һөртөргә. 3-4 көндән һуң сабыртмалар үтә.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

*ЙОЛАЛАРЫБЫҘ*



# КӘКҮК

**Кәкүк - кешенең ғүмерен билдәләй, тигән ышаныу бар башҡорт халҡында. "Изге ҡош, кәкүк, мин был донъяла нисә йыл йәшәйем?" тип мөрәжәғәт итеп, күкүктең саҡырғанын һанайҙар.**

Ҡайһы бер төбәктәрҙә был йоланың ҡайһы бер үҙенсәлектәре бар. Мәҫәлән, Свердловск өлкәһе башҡорттары кәкүккә мөрәжәғәт итер алдынан, ул ултырған ағасты ҡосаҡларға кәрәк, тиҙәр. Йылайыр районында кәкүк ултырған ағас башына ҡарап ҡысҡырырға кәрәк. Башҡа яҡтарҙа был йола ябай ғына башҡарыла: кәкүктең тауышын ишеткәндән һуң, унан ҡалған ғүмерең тураһында һорайһың.

Башҡорттарҙың ышаныуҙары буйынса, кәкүк кешеләрҙең сәләмәтлегенә йоғонто яһай ала. Яҙын, тәүге тапҡыр кәкүк саҡырғанын ишетеп, ергә ҡолағандар һәм ерҙә тәгәрәп йөрөп, кәкүккә өндәшкәндәр: "Йәнгә һәм тәнгә һаулыҡ, оҙон ғүмер бир!" Бөрйән, Хәйбулла райондарында йәшәүселәр билдәләүенсә, тәүге тапҡыр кәкүк саҡырғанда унын яғына йөҙөн менән әйләнергә һәм: "Һаулыҡ бир, Аллам!" - тип, ҡапыл ҡоларға һәм өс тапҡыр ерҙә әйләнергә. Был мәғлүмәтте Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ районында йәшәүселәр тағы ла тулыландырҙы.

*Тәнемдең һаулығын бир,*
*Йәнемдең һаулығын бир,*
*Тәнемдең зәкәтен бир,*
*Илдең именлеген бир.*
*Күпте күрҙем. Алда ла*
*Тағы күпте күрергә,*
*Насип булһын күрергә,* - тип һамаҡларға кәрәк, тиҙәр улар. Һамаҡтан һуң торған ерендән ергә ятып, өс тапҡыр әйләнергә һәм уң ҡулға тупраҡ алырға. Был тупраҡ бөтөн ауырыуҙарҙан дауалай, тигән ышаныс бар. Унын бер өлөшөн ишек тупһаһы аҫтына һипһәң, ул барлыҡ бәләләрҙән һаҡлай.

Шул уҡ ваҡытта, кәкүк бәлә килтереүсе ҡош булып та иҫәпләнә. Кешенең баш осонан осоп үткән кәкүк ниндәйҙер хәүеф килтерә, тиҙәр. Ауылға кәкүк осоп килһә, һуғышҡа була, тигән ышаныу ҙа бар. Был осраҡта: "Һинең урының бында түгел, урманда", - тип әйтергә кәрәк. Борон ауылға кәкүк осоп килһә, уны тауышланып, ҡурҡытып ебәргәндәр. Кәкүк ултырған ергә йәки ағастың төбөнә ҡатыҡ, һөт ҡойһаң, кәкүктең күнеле була һәм ул бәлә-ҡазаһын кире алып китә, тиҙәр.

Юлда ла кәкүкте осратыу яҡшыға түгел. Юлсыға кәкүк осраһа, юл уңмай. Бындай мәлдә юлсы өскә кейеменең салғыйын күтәреп: "Аяҡ-канатынды туҙҙырһындар!" - тип ҡысҡырырға тейеш, тиҙәр.

Башҡорт халыҡ йырҙарында ла кәкүк һағыш, ҡайғы ҡошо булып иҫәпләнә.

*Ҡысҡырмасы, кәкүк, ай, һаташып,*
*Хәсрәт арттырырға маташып,* - тип йырлана "Ҡысҡырмасы, кәкүк" йырында. "Кәкүккәй" йырында ла кәкүк кешегә хәсрәт килтереүсе булып тора:

*Кәкүк менән генә, ай, ҡарсыға,*
*Ҡайғы-хәсрәт өсөн яралған.*

Кәкүкте төштә күреү ҙә хәйерлегә түгел.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ*

# ДЕПРЕССИЯНЫ...

## ашау менән еңеп булмай

**Күңел төшөнкөлөгө, эс бошоу, һағыш, даими борсолоу, бөтә нәмәгә ҡарата һүлпәнлек тойғоһо баҫҡан ваҡыттар, тормоштан йәм таба алмаған мәлдәр бер кемде лә урап үтмәйҙер, моғайын. Бындай ваҡытта яңғыҙлыҡҡа ынтылыу, барыһынан да ситләшеп, тынысылыҡта ҡалыу теләге көслө була. Кемдәлер бындай хәл-торош һирәк күҙәтелһә, икенселәр депрессияға йыш бирелеүсән. Был хәлдән нисек сығырға? Йәшәү мәғәнәһен нисек табырға? Ошо һорауҙарға яуапты психолог Регина ҒИЗЗӘТУЛЛИНА менән бергә эҙләйбеҙ.**



- Бындай тойғолар уңышлы тормошта йәшәүселәрҙә лә, көн яҡтыһына сығыу өсөн бар көсөн һалып тырышҡан кешеләрҙә лә бер үк кимәлдә күҙәтелергә мөмкин. Ләкин меланхолия өйәнәгенән яфаланыусылар ҙа, тәрән депрессия хәлендә булыусылар ҙа яҙмыштарынан ҡәнәғәтлек тойғоһо кисереп йәшәй башлауҙы үҙҙәре хәл итергә тейеш. Бының өсөн уйлап осона сыға алмаҫлыҡ уйҙар һаҙлығында батмаҫҡа, ә күңел торошон ипкә килтереүсе, йөрәк һыҙлауын баҫыусы аҙымдар эшләү мөһим. Иң мөһиме - ҡул ҡаушырып, үҙ-үҙенде йәлләп, "бахырлыҡ" артына йәшеренеп, кемделер нимәләр гәйепләп ултырмау, ә был хәлдән сығыу юлын эҙләү.

Депрессия тойғоһо баҫһа, тәү сиратта, белгескә, йәғни психологка мөрәжәғәт итеү файҙалы булыр. Ләкин был кәңәште күптәр урап үтәсәген беләм, сөнки беҙҙең йәмғиәттә үҙ проблемаң менән психологка барыу күренеше әлегә ят. Шулай уҡ ауыл-ҡасабаларҙа йәшәүселәрҙең, беренсенән, психолог эҙләп ҡалаға барыуы икеле булһа, икенсенән, йорт-ҡура, мал-тыуарҙан бушап, күңел бушатып йөрөрлөк ваҡыттары ла юҡ. Шуға күрә килһә кәңәштәр урынлыраҡ һәм файҙалыраҡ булыр, тип уйлайым.

Бошонҡолоҡто баҫыу өсөн кәйефегеҙҙе күтәрергә мөмкинлек биргән эштәр эшләгеҙ. Мәҫәлән, баҡсағыҙҙағы, тәҙрә төптәрендәге сәскәләр, гөлдәр менән булышыу - уларҙың гүзәллеге күңел төшөнкөлөгөн һис һүҙһеҙ баҫасаҡ.

Эштәрегеҙҙе ситкә ҡуйып тороп, балаларығыҙ менән бергә өҫтәл уйындары уйнағыҙ йәки башҡа төрлө шөғөл табығыҙ - уларҙың шат тауыштары, күңел көрлөгө, һәр күренештән шатлыҡ таба белеү һәләте һеҙгә ыңғай тәьҫир итәсәк.

Үҙегеҙҙе һәм яҡындарығыҙҙы күптән әҙерләргә теләп тә әлегәсә ҡулығыҙ етмәйерәк торған аш-һыу, тәмлекәстәр бешереп һыйлағыҙ - уларҙың ҡәнәғәт йөҙөн күреп, рәхмәт һүҙҙәрен ишетеп кәйефегеҙ бермәбер күтәреләсәк. Ләкин үҙегеҙ артыҡ ашауҙан йәки, киреһенсә, туймай ҡалыуҙан һаҡланығыҙ. Ғөмүмән, депрессияны ашау менән еңергә тырышыу - иң хаталы юл икәнен оноторға ярамай.

Өмөтһөҙлөк тойғоһо баҫып китһә, бер ҡасан да яңғыҙ ҡалмағыҙ. Үҙ-үҙегеҙгә бикләнеү хәлегеҙҙе тағы ла ҡатмарлаштырасаҡ, сөнки бындай осраҡта кеше ҡорт һымаҡ үҙен "соҡой" башлай. Туғандар, дуҫтарығыҙ менән осрашығыҙ, күптән күрмәгән танышығыҙға шылтыратығыҙ йәки барып күрегеҙ. Бындай күрешеү-аралашыу ваҡытында күпселек осраҡта элек булған ҡыҙыҡлы хәл-ваҡиғалар ҡалҡып сығып, күңелле минуттар иҫкә төшөп, һағыш тойғоһон таратып ебәрерлек йылмайыу-көләүгә сәбәп була. Әгәр ҙә һүҙ һеҙҙе борсоған мәсьәләгә төшөп, күҙегеҙгә йәштәр тәгәрәһә, уларҙы тыйырға тырышмағыҙ - күңел бушағансы илау үҙе үк депрессиянан сығырға ярҙам итеүсе йоғонтоло юлдарҙың береһе.

"Тормошомда барыһы ла насар", тигән һығымта эшләргә ашыҡмағыҙ, ә барлыҡ факттарҙы яҡшылап анализлағыҙ. Күпселек осраҡта, фаразлауҙарҙы ысынбарлыҡ менән сағыштырғанда, хәлдәр бик үк ҡурҡыныс түгеллеге асыҡлана.

Оҙайлы депрессияға, ғәҙәттә, пессимистик ҡарашлы, бөтә нәмәне ҡара-һоро төҫтә генә күргән, һәр һүҙҙән, һәр кешенән үҙенә ҡарата яуызлыҡ, көнсөллөк, хаслыҡ ҡына көткән кешеләр бирелә. Был осраҡта донъяға ҡарашты үҙгәртеү, оптимислыҡ тулҡынына күсеү, кешеләрҙә яҡшылыҡты күрә белеү күңел донъяһын үҙ урынына ҡайтарыу өсөн иң дөрөҫ аҙым.

Бер ҡасан да үҙ алдығыҙға хәл иткеһеҙ ауыр мәсьәләләр ҡуймағыҙ һәм үҙ иңегеҙгә ҙур яуаплылыҡ алмағыҙ. Ваҡиғалар бер ҡасан да һеҙ уйлағанса ғына бармай, тормош үҙенең төҙәтмәләрен, өҫтәмәләрен индереп тора һәм үҙегеҙгә йөкмәткән күтәргеһеҙ мәсьәләләрҙе сисеү уңышһыҙлыҡҡа осрауы ла бар. Был иһә, үҙ сиратында, кәйеф төшөүгә, төшөнкөлөккә, йәғни депрессияға алып барыуы тура юл.

Һүҙемде йомғаҡлап, тағы ла шуны әйткем килә. Депрессия ваҡытында бер ҡасан да тормошоғоҙҙо ҡырҡа үҙгәртер ҡарарҙар ҡабул итмәгеҙ, сөнки бындай ваҡытта кеше ваҡиғаны объектив күҙлектән сығып баһалай алмай. Тормошоғоҙҙағы ҡара һыҙыҡ мотлаҡ үтәсәк, ә күңел төшөнкөлөгөнә бирелгән саҡта ҡабул иткән хаталы ҡарарығыҙҙы үҙгәртергә мөмкинлек булмауы ла бар.

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА яҙып алды.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ҺӘММӘГЕҘГӘ - ҺАУМЫҺЫҒЫҘ!

**Бер саҡ өйҙән эшкә килә ятҡанда 4-5 йәштәрҙәге улын етәкләгән бер әсә тап булды. Уның бәләкәс кенә улы минә "Һаумыһығыҙ!" тип сәләм биргәс, бер мәлгә генә албырғап ҡалдым да, сәләмде ҡабул итеп, үтеп киттем.**

Ҡала урамында таныш булмаған кешенең һаулыҡ һорашыуы ғәҙәттән тыш хәл һымаҡ бит инде, ҡыҙыҡһынып, артыма боролоп ҡараным. Ҡаршыларына килгән ике ҡатынға йәнә ихласлап "Һаумыһығыҙ!" тине малай. Тегә ҡатындар ҙа ҡапылғарай аптырап ҡалдылар, әммә бер ни өндәшмәй, юлдарын дауам иттеләр. Минең туҡтап уҡ уларҙы күҙәтеүемде күргәс, малайҙың әсәһе йылмайып: "Һеҙ аптырамағыҙ, беҙ улыбыҙҙы үҙебеҙ шулай өйрәтәбеҙ", - тине.

Малайҙың сәләмен ҡабул итмәгән ҡатындарҙың үҙ-ара һөйләшеүе ҡолаҡҡа салынып ҡалды: "Әсәһе нинә улай һәр кемгә сәләм бирергә өйрәтә икән балаһын? Кешенең төрлөһө бар, бер ни аңламаған сабыйҙы харап итеп ҡуйһалар..." - тине ҡатындарҙың береһе, икенсеһе уны йөпләне. Мин дә улар менән килешә биреберәк ҡуйҙым ҡуйыуға. Әммә ике урталыҡта ҡалдым шикелле. Һәр хәлдә, балаһын ихлас, асыҡ күңелле итеп тәрбиәләргә тырышҡан әсә лә, балаһын йәмғиәттең кире күренештәренән аралар өсөн шикләнеү, һаҡланыу кәрәклеген яҡлаған ҡатындар ҙа хаҡлы ине. Шулай ҙа, баяғы малайҙың әсәһе барыбер ҙә күңелгә яҡыныраҡ тойолдо, сөнки был хәл киләсәккә өмөт тигән яҡтылыҡ менән бәйләнгәйне бит.

**Иҙел РӘХИМОВ.**

***Уны донъяның Каталон картаһы йәки Каталон атласы тип йөрөтәләр. Унда ла беҙ ике яҙыу табабыҙ: берене - Башҡорт (Өфө) ҡалаһы, икенсеһе башҡорттар йәшәгән ер булараҡ һүрәтләнә.***



## ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...

**1737 йылда Санкт-Петербургтағы Фәндәр академияһында "Атлас, сочиненный к пользе и употреблению юношества и всех читателей ведомостей и исторических книг" нәшер ителә. Был донъя атласы 22 картанан тора, шул иҫәптән унда астрономик карталар, ярымшар һәм континенттар карталары күрһәтелгән. Атластың авторы билдәһеҙ, ул, күрәһең, сит ил һәм ҡайһы бер урыҫ сығанаҡтарына таянып эшләнгән. Атласта ун һигеҙенсе номер аҫтында Азия картаһы бирелгән. Беҙгә ундағы бер мәғлүмәт ҡыҙыҡлы һәм мөһим: Өфө урынында Баскирь (Башҡорт) ҡалаһы күрһәтелә. Ни өсөн Башҡорт, ә Өфө түгел? Быны асыҡлар өсөн урта быуаттар тарихына күҙ һалайыҡ.**

# ӨФӨНӨҢ ЙӘШЕ...

## боронғо карталарҙа

XIV быуат башында Көньяҡ Уралға төрлө миссионерҙар килә. Шуларҙың береһе венгр-францискан брат Иоганка була. Ул, үҙе әйтеүенсә, Баскардия иленә (Башҡортостанға) килә. Башҡорт ерендә брат Иоганка байтаҡ йәшәй. 1320 йылда ул минорит ордены генералы брат Михаилға хат яҙа. Иоганка был хатында: "Мин, брат Иоганка, ике брат венгр һәм бер инглиз менән Баскардияға (Башҡортостанға) барып еттек... Мин Вильгельм исемле инглиз менән алты йыл буйы булдым... Бөтә Баскардия хакимы ғаиләһе менән сарацинлыҡ (бында - мосолман дине мәғәнәһендә) менән ағыуланған..." - тип яҙа һәм башҡа нәмәләр тураһында ла иҫкә алып үтә. Брат Иоганкаының хатынан беҙ шундай һығымтаға киләбеҙ: ул заманда башҡорттарҙың хакимы (ханы) һәм уның ставкаһы булған. Моғайын, ул ставка (административ үҙәк) Өфө ҡалаһы булғандыр.

Был фекерҙе иҫбатлар өсөн урта быуат карталарына мөрәжәғәт итәйек. 1367 йылда Венеция сауҙагәрҙәре ағалы-ҡустылы Пициганолар карта төҙөй. Ул картала урта быуатта Европа илдәренең Алтын Урҙа менән сауҙа иткән ваҡыты сағылдырылған. Шуға күрә унда Алтын Урҙаның 40-тан ашыу ҡалаһы, Иҙел, Кама буйҙары һүрәтләнгән. Шул иҫәптән Башҡортостан ерендә Башҡорт (Пашхарти) ҡалаһы күрһәтелгән. Унан ары тағы бер "башҡорт" (пашхарти) тигән яҙыу бар. Уныһы инде башҡорттар йәшәгән ер тигәнде аңлата. Башҡорт ҡалаһы, гидрография ягынан ҡарағанда, урынлашыуы менән Өфө еренә тура килә.

1375 йылда Мальорка утрауында йәшәгән Авраам Крескес һигеҙ картанан (киҫәктән) торған ҙур карта эшләй. Уны донъяның Каталон картаһы йәки Каталон атласы тип йөрөтәләр. Унда ла беҙ ике яҙыу табабыҙ: береһе - Башҡорт (Өфө) ҡалаһы, икенсеһе башҡорттар йәшәгән ер булараҡ һүрәтләнә.

Һуңыраҡ төҙөлгән карталарға килгәндә, беҙ Башҡорт-Өфө ҡалаһын Герард Меркатор (1554), Петер Планкиус (1592), Юстис Данкерт (1635), Николай Сансон (1654) һәм башҡаларҙың карталарында күрәбеҙ.

Урта быуаттың тарихи-географик сығанаҡтарына ла күҙ һалайыҡ. 1517 йылда Краков ҡалаһында поляк тарихсыһы һәм географы Матвей Меховскийҙың "Трактат о двух Сарматиях, Азиатской и Европейской, и о находящемся в них" тигән хеҙмәте нәшер ителә. Ул китап Европала бик популяр була, уны төрлө телдәргә күп тапҡыр баҫып сығаралар. М. Меховский Урта һәм Көньяҡ Урал тураһында былай тип яҙа: "Московия арьяғында... Төньяҡ Азия сигендә, Скифияла төрлө халыҡтар һәм өлкәләр бар... шул иҫәптән, Пермь, Башҡортостан, Черемисса, Югра һәм Корела... Пермь ерендә үҙҙәренең теле, башҡорт ерендә лә үҙ теле".

Урыҫ сығанаҡтарына ла иғтибар итәйек. Мәҫәлән, Николай Карамзин "Рәсәй дәүләте тарихы" тигән ҙур хеҙмәтендә, урыҫ йылъяҙмаларына таянып: "1505 йылда Мөхәммәтәмин хан вельможаларының береһен, Өфө кенәзен, ниндәйҙер күрһәтмә менән Мәскәүгә ебәрә", - тип яҙа.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Юғарылағы 1737 йылғы атластың Азия картаһында ни өсөн Өфө ҡалаһы башҡорт исемендә бирелгәнен асыҡланыҡ, тиергә була. Урта быуат Европа географик һәм картографик традицияһы буйынса, Башҡортостан иле, башҡорт халҡы барлығы аныҡ билдәле була. Шуға күрә лә был атласты төҙөүсе, урта быуат Европа географик һәм картографик традицияһына таянып, Өфө урынындағы ҡаланы Башҡорт ҡалаһы тип күрһәтә. Өфө тарихын воевода Иван Нагойҙың 1574 йылда килеүе менән генә сикләү дөрөҫ түгел. Тарихи, географик һәм археологик сығанаҡтар Башҡорт-Өфө ҡалаһының борондан булыуын иҫбатлай.**

**Айбулат ПСӘНЧИН, география фәндәре докторы.**




*Донъя атласы (Азия картаһы) - Рәсәй (Император) Фәндәр академияһының тәүге эштәренең береһе. 1737 й.*

## БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Башҡорттарҙың этногенезы мәсьәләләре

*Ҫ* һөйләшендә *һ* фонемаһы бөтөнләй юҡ. Һүҙ башында һәм аффикстарҙа, һүҙ аҙағында һәм аффикстарҙа, шулай уҡ тамыр уртаһында *Ҫ* фонемаһы ҡулланыла. Бындай фонетик айырмалыҡ (һөйләш) территорияһы Башҡортостандың уртаһынан башланып, көньяҡ-көнбайышҡа тар һыҙат булып һуҙыла. Был һөйләштә мендәрҙең төп халҡы һөйләшә.

*һ* һөйләше *һ* фонемаһының һүҙ башында ғына түгел, уртаһында ла, аҙағында ла, аффикстарҙың башында ла, аҙағында ла, шулай уҡ башҡа һөйләштәрҙә *Ҙ*, *Ҫ* өндәре ҡулланылған урындарҙа ла ҡулланылыуы менән айырыла. Был һөйләштә башҡа башҡорттарҙан физик тип буйынса айырылып торған һалйоғоттар һөйләшә.

*Ҙ* - *Ҫ* һөйләше. Башҡа һөйләштәрҙә *Ҙ* өнө ҡулланылғанда, был һөйләштә әгәр *Ҙ* өнө ябыҡ ижектең һуңғы өнө булып торһа, уны *Ҫ* өнө алмаштыра. Әммә әгәр ике һуҙынҡы араһында *Ҫ* өнө ҡулланылғанда, ул *Ҙ*-ға әйләнә. Был фонетик айырмалыҡты йөрөтөүсе башҡорттар ҡара-табындар һәм бала-ҡатайҙар.

*С* һөйләшендәге башҡорт һүҙҙәрендә *һ*, *Ҫ*, *Ч* (дж) өндәре юҡ. Уға хас өн булып *Ҙ* һәм *З* тора. Был һөйләштә һөйләшеүсе, татар телендә уҡыусы һәм яҙыусы таныптар һәм елдәктәр Ҡариҙел йылғаһы бассейнында, Әй йылғаһына ҡойған урындан аҫтараҡ йәшәй.

*Ҙ* һөйләшендә *һ* һәм *Ҫ* өндәре юҡ, бынан тыш, ошо һөйләштә *Ч* менән һөйләшәләр һәм ж менән дж-ны айыралар, уларҙың аҙсылығы *Ч* урынына *С* йәки *Ч* менән *С* араһында торған айырым өндө ҡуллана, шулай уҡ ж менән дж-ны айырмайынса, ж ҡулланалар.

Был диалектта һөйләшеүсе башҡорттар Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышындағы ырыу-ҡәбилә составы бик сыбар булған билдәле бер территорияны алып тора. Унда йыландар, ҡырғыҙҙар, юрматылар, ҡайлы-ҡаршиндар, буләрҙәр, елдәктәр, гәрәйҙәр, таҙлар, ирәктеләр, урандар һәм ғәйнәләр йәшәй. Улар шулай уҡ әҙәби татар телендә уҡый һәм яҙа.

Башҡалары араһында Т. Г. Байышев П-Т тип атаған диалект айырым урын алып тора. Был диалектта һөйләшеүселәр тупланып йәшәмәй, улар таныптар, мендәр, табындар, юрматылар, бер ни тиклем инйәр-ҡатайҙар йәшәгән территорияға һибелгән. Был һөйләштең үҙенсәлеге шуға ҡайтып ҡала: атап үтелгән диалекттарҙа, *Ҙ* диалектынан башҡа, төп башҡорт һүҙҙәренең башында гәҙәттә *Б* өнө ҡулланыла, был осраҡта һаңғырау *П* әйтелә. Һүҙ уртаһында *Л*, ***М***, *Н*, *Н* тартынҡыларынан һуң ҡулланылған парлы *Д* урынына һәм аффикстар алдынан был диалектта һәр ерҙә *Т* әйтелә. Һәм, киреһенсә, башҡа диалекттарҙа *Т* ҡулланылған һүҙҙәрҙә, бында бик йыш *Д* ҡулланыла.

Төньяҡ-көнсығыш морфологик айырмалыҡтар (йәғни тартынҡыларҙың дүрт төр ассимиляцияһы айырмаһы) аффикстарҙың туғыҙ формаһына бәйле. Атап әйткәндә: 1) килеш ялғауҙарының дүрт формаһы; 2) күплек ялғауҙары; 3) һүҙ яһаусы исем ялғауҙары; 4) исемдәрҙән ҡылым яһаусы ялғауҙар; 5)сифат яһаусы ялғауҙар; 6) хәбәр һөйкәлешендәге үткән заман ҡылымы ялғауҙары; 7) рәүеш ялғауҙары; 8) киҫәксәләр; 9) һуҙынҡыларҙы ассимиляциялауҙа ҡулланылған дүрт тип дөйөм ялғауҙар.

*Үкенескә күрә, яңыраҡ Башҡорт дәүләт аграр университетының Урал аръяғы филиалын ябыу тураһында ҡарар ҡабул ителде. Был Урал аръяғының ауыл хужалыҡтарын белгестәр менән тәьмин итеүгә кире йоғонто яһаясаҡ.*

# МИЛЛИ ВУЗ НИНДӘЙ

## Әлбиттә, Сибай

**Мәғариф өлкәһендә туҡтауһыҙ барған төрлө үҙгәрештәрҙе урта белем биреүсе мәктәпкә генә бәйләп ҡабул итергә күнектек шикелле. Әммә реформалар юғары белем биреүсе йорттарҙы ла ситләтеп үтмәне. Һуңғы осорҙа Рәсәй вуздарында бюджет урындарының ғына түгел, хатта вуздарҙың үҙҙәренең һаны ҡыҫҡара барғанда республикалағы белем усаҡтарының хәле күптәрҙе борсоуға һалалыр, моғайын. Бөгөнгө заман, ил етәкселеге юғары белем биреүсе уҡыу йорттарына ниндәй талаптар ҡуя? Бындай шарттарҙа вуздарҙың үҫеш перспективаһы ниндәй? Хәҙерге заман хеҙмәт баҙарында ниндәй белгестәр талап ителә? Ошо ябай булмаған һорауҙарға яуаптарҙы Башҡорт дәүләт университеты Сибай институты директоры Зиннур Йәрмөхәмәтовтың уҡыу-уҡытыу эштәре буйынса урынбаҫары, педагогика фәндәре кандидаты Азамат КӨМӨШҠОЛОВ һәм техник фәндәр кандидаты, педагогика фәндәре докторы, профессор Азат ВӘЛИЕВ менән бергә эҙләйбеҙ.**

**Бөгөнгө заманда абитуриенттар өсөн мөмкинлектәр ҙурыраҡ, улар ауылында ғына ултырып, БДИ һөҙөмтәләре менән ҙурыраҡ ҡалаларҙа, сит өлкәләрҙә урынлашҡан вуздарға уҡырға инә ала. Ошондай шарттарҙа юғары белем биреүсе уҡыу йорто, бигерәк тә милли вуз замандан артта ҡалмаҫ өсөн ниндәй булырға тейеш?**

**А. Көмөшҡолов:** Ысынлап та, бөгөн юғары һөнәри белем биреү системаһында ҙур үҙгәрештәр бара. Был процесс артабан да дауам итәсәк әле. Рәсәй Хөкүмәте рәйесе Д. Медведев билдәләүенсә, илдә тейешле белем бирә алмай, бары тик диплом таратыу менән генә шөғөлләнгән вуздар күп. Ил етәкселеге, үҙгәрештәр иң тәүҙә ошондай уҡыу йорттарына ҡағыла, тип раҫлай. 2016-2020 йылдарға тәғәйенләнгән маҡсатлы федераль программаға ярашлы, Рәсәйҙә конкуренцияға һәләтле вуздар һәм филиалдар ғына ҡаласаҡ. Әгәр ҙә бөгөн Сибай институты Рәсәй Мәғариф һәм фән министрлығының ярайһы уҡ ҡаты талаптарына яуап бирә ала икән, ул хәҙерге замандың иң алдынғы вузы тип аталырға хаҡлы. Шуға ла милли вуз ниндәй булырға тейеш ул, тигән һорауға, Сибай институты һымаҡ, тип тә яуап биреп булыр ине. Һәр яңылыҡ яҡшы, әлбиттә, әммә уның һөҙөмтәһе тураһында ла ныҡлы уйлап эш итергә кәрәк. Үкенескә күрә, яңыраҡ Башҡорт дәүләт аграр университетының Урал аръяғы филиалын ябыу тураһында ҡарар ҡабул ителде. Һис шикһеҙ, был Урал аръяғының ауыл хужалыҡтарын белгестәр менән тәьмин итеүгә кире йоғонто яһаясаҡ, бюджет иҫәбенә юғары белем алыусы студенттар һаны кәмейәсәк. Килеп тыуған был хәлдә нисектер йомшартыу маҡсатынан уларҙың ҡайһы бер бүлек студенттарын институтҡа күсереү процесын башланыҡ. Был белем усағының фән кандидаттары һәм докторҙары ла конкурс нигеҙендә Сибай институтына эшкә алынасаҡ.



Милли уҡыу йортон иһә рухлы етәксе, рухлы уҡытыусылар һәм, әлбиттә, рухлы студенттар ғына күтәрә ала. Беҙ барыбыҙ ҙа иң тәүҙә халҡыбыҙҙың мәнфәғәтен алға ҡуйып эшләйбеҙ. Уҡытыусыларҙың шәхси өлгөһө, билдәле шағирҙар, яҙыусыларҙың бюстары, башҡорт мәғрифәтселәренең барельефтары, рәссамдарҙың картиналары ла студенттарҙы тәрбиәләй - Сибай институтының үҙенсәлеге лә шундалыр. Студенттар айырылып тора бит ул беҙҙә, уларҙың һәр береһе бөтөнләй таныш булмаған кешегә лә һаулыҡ һораша.

**А. Вәлиев:** Юғары квалификациялы белгес әҙерләү өсөн вуздың тейешле кимәлдәге матди-техник базаһы, ятаҡтары, белем биреү, тәрбиә, спорт, мәҙәни йүнәлештә башҡарған эштәре юғары кимәлдә булырға тейеш. Белем алыу өсөн уҡыу йорто һайлағанда иң тәүҙә ошоға иғтибар итергә кәрәктер буласаҡ студентҡа. Сибай институты был күрһәткестәр буйынса ҙур ҡалаларҙа урынлашҡан күп вуздарҙы уҙҙырып ебәрә. Икенсенән, бында тәрбиә эшенә ҙур иғтибар бирелә. Ҙур ҡаланың күҙҙе ҡыҙҙырған һәм уҡыуҙан ситләштерергә генә торған әүрәткес яҡтары күп. Беҙҙең халыҡтың борон-борондан белемгә ынтылышы ҙур булған, бөгөн дә ата-әсәләр балаһын мотлаҡ уҡытырға тырыша, аҡсаһын да таба. Балаһы бының ҡәҙерен белһә, яҡшы ла ул. Тик уҡыуға еңел ҡарап, уҡый алмай ҡайтҡандары ла бар бит. Бында ата-әсәнең дә ғәйебе бар. Һораштыра башлаһаң, балаһын ятаҡта түгел, ә ҡуртымға фатир алып йәшәтеүҙәре, ай һайын 15 меңләп аҡса ебәреп тороуҙары асыҡлана. Шунан ни эшләп дәрескә йөрөһөн ул йәш кеше? Ә бында һәр студент күҙ алдында, һәр төркөмдөң кураторы улар менән әүҙем эшләй. Көнөнә 2 дәрес ҡалдырһа, нимә булды, тип шылтырата башлайбыҙ. Зачет, имтихандары менән дә ҡыҙыҡһынабыҙ. Быны студенттарҙың иркен ҡыҫыу тип аңларға кәрәкмәй, уҡытыусыларҙың ҡурсыуы аҫтында яҡшы белем алып, 4-се курсты бөткәс, магистратураға баш ҡалаға ғына түгел, сит илгә сыҡһын, әйҙә. Бының өсөн Сибай институты студенттарының ныҡлы белеме бар.

**А. Вәлиев:** Тәнәфес ваҡытында балалар үҙ-ара башҡортса һөйләшә. Сит милләт балалары һаны күп түгел, шулай ҙа улар ҙа өйрәнеп тора бит башҡорт теленә, һорауҙар бирһәң, тик башҡортса яуап бирәләр - был да үҙенә күрә тәрбиә. Быйыл 2014/2015 миҙгелдәге Башҡорт асыҡ КВН лигаһының финал уйынында институттың "Еңмештәр" командаһы еңеү яуланы. Улар филологтар ҙа түгел, ә технология факультеты студенттары - буласаҡ инженерҙар, уҡытыусылар. Бары тик беҙҙә ысынлап та телде бар студенттар ҙа яҡшы белә. Үҙҙәре ойошторҙо, бынамын итеп сығыш та яһайҙар. Рус телендә үткән КВН-дарҙа ла ҡатнашып, призлы урындар яулайҙар, йәғни улар өсөн тел сиктәре юҡ.

**Етәксе булараҡ, студенттарҙың теләк-ниәттәрен йыш күтәрмәләп тораһығыҙмы?**

**А. Көмөшҡолов:** Әлбиттә, ниндәйҙер идеялар, теләктәр менән янып йәшәгән студентҡа ярҙам итергә тырышабыҙ. Институтта студенттарҙың үҙидаралығы бар һәм улар күп кенә сараларҙы үҙҙәре ойоштора. Мәҫәлән, уҡыу, фән, спорт, йәмғиәт эштәрендә әүҙем студенттарҙы һайлап алып, бүләктәр өсөн бағыусылар табып, уҡыу йылы аҙағында "Йыл студенты" үткәреп ҡуйҙылар.

Институттың ғилми советында студенттарҙан вәкилдәр бар, абруйлы профессорҙар, фән әһелдәре менән бергә улар ҙа совет эшендә ҡатнаша. Бындай студент исеменә лайыҡ булыу өсөн ул шулай уҡ яҡшы уҡырға, студенттар үҙидаралығында үҙенең позицияһын күрһәтә алырға тейеш. Һәр факультетта тиерлек исемле стипендиялар бар. Юристарҙа, мәҫәлән, Х. Ҡарасурин, педагогтарҙа - М. Өмөтбаев, музыканттарҙа - Х. Әхмәтов исемендәге премия стипендиаттары билдәләнә. Бынан тыш, Сибай ҡалаһы хакимиәтенең гранты бар. Яҡшы өлгәшһә, был стипендияларҙы түләүле бүлектә уҡыған студенттар ҙа алыу хоҡуғына эйә. Түләүле бүлектәрҙә уҡыған студенттарҙы ла ятаҡта урын менән тәьмин итәбеҙ, бындай тәжрибә шулай уҡ башҡа вуздарҙа һирәк осраған күренеш.

***Һәр факультетта тиерлек исемле стипендиялар бар. Юристарҙа, мәҫәлән, Х. Ҡарасурин, педагогтарҙа - М. Өмөтбаев, музыканттарҙа - Х. Әхмәтов исемендәге премия стипендиаттары билдәләнә. Бынан тыш, Сибай ҡалаһы хакимиәтенең гранты бар. Яҡшы өлгәшһә, был стипендияларҙы түләүле бүлектә уҡыған студенттар ҙа алыу хоҡуғына эйә. Түләүле бүлектәрҙә уҡыған студенттарҙы ла ятаҡта урын менән тәьмин итәбеҙ, бындай тәжрибә шулай уҡ башҡа вуздарҙа һирәк осраған күренеш. Ашханала студент тулы төшкө ашты 40-50 һумға ашай. Студенттар үҙҙәре лә, бик түбән ашаталар, хаҡы ла арзан, тиҙәр. Уҡыу йортоноң үҙ хужалығы бар, иген дә үҫтерәбеҙ, шуға он үҙебеҙҙеке. Йылҡы малы тотабыҙ, ит тә бик арзанға төшә.***

Ашханала студент тулы төшкө ашты 40-50 һумға ашай. Студенттар үҙҙәре лә, бик тәмле ашаталар, хаҡы ла арзан, тиҙәр. Уҡыу йортоноң үҙ хужалығы бар, иген дә үҫтерәбеҙ, шуға он үҙебеҙҙеке. Йылҡы малы тотабыҙ, ит тә бик арзанға төшә. Тәбиғи-математика факультетында уҡыған студенттар уҡыу планы буйынса ҡаралған быҫыу-производство практикаһын ошо хужалыҡта үтә. Төрлө эксперименттар үткәрәләр, былтыр, мәҫәлән, "Салауат Юлаев" тип аталған бойҙай сорты үҫтерҙеләр. Уларҙан тыш, һәр факультеттың студенттары картуф, сөгөлдөр йыйыуға сыға. Ҡортсолоҡ менән шөғөлләнәләр, емеш-еләк баҡсаһын киңәйтергә планлаштырғанбыҙ. Ҡырға сығып эшләүҙән бер кем дә баш тартмай, киреһенсә, был студент тормошон күңелләндереп кенә ебәрә.

**А. Вәлиев:** Был агробиостанцияла ысынлап та күңелле ул. Һәр факультеттың үҙенең йорто бар. Ял менән эште берләштерәһең бында, практика ла үтәләр, ял да итәләр. Йорттарҙы студенттар үҙҙәре ҡарап торалар. Унан һуң, йәйге каникул мәлендә төҙөлөш отрядына яҙылып, айына 15-20 мең аҡса эшләргә була. Бында ла теләүселәр күп, шуға конкурс аша ҡабул итәләр.

**А. Көмөшҡолов:** Институтта булған йыһаздың 80 проценттан ашыуы технология факультетының цехында эшләнә. Йыһаз төҙөү эшенә уҡыған саҡта өйрәнәләр. Ышанмаҫһығыҙ ҙа: 2002 йылда бинаға ремонт яһағандан һуң ҡуйылған йыһаздар яңыртылмаған. Парта, өҫтәл, стенкалар бөгөн дә өр-яңы кеүек. Студенттар үҙҙәре эшләгәс, уны берәү ҙә боҙмай. Парталарға яҙмаһындар, тип, студенттарҙы ҡарап та йөрөмәйбеҙ, улар үҙҙәре был тәртипкә өйрәнгән. Сентябрь айында "Беренсе курс студенты айлығы" иғлан итәбеҙ. Улар институт администрацияһы, медицина белгестәре, полиция хеҙмәткәрҙәре менән осраша, сөнки ауылдан яңы килгән балаға институтҡа ғына түгел, ҡала тормошона ла өйрәнергә кәрәк.

**А. Вәлиев:** Тап ошо адаптация осоронда туристик слет ойоштորола. Агробиостанцияға барып, конкурстар ойоштороп, матур итеп ял итәләр, үҙҙәрен күрһәтәләр - коллектив тап ошо сарала барлыҡҡа килә, тип уйлайым. Беренсе курс студенты оялып йөрөмәһен өсөн "Тәүге тапҡыр сәх-

***✓ Башҡорт телен генә түгел, "Башҡортостан мәҙәниәте тарихы" фәнен дә барлыҡ студенттар уҡый. Башҡортостанда йәшәп, уның тарихын белмәйенсә лә булмай, быны студенттар ҙа, институт етәкселеге лә яҡшы аңлай.***

нәлә", "Алло, таланттар эҙләйбеҙ", "Студентлыҡҡа бағышлау" үтә, өлкән курс студенттары үҙҙәренең һөнәрҙәрен күрһәтә. Институтта ике бейеү ансамбле бар, улар икеһе лә халыҡ ансамбле исемен йөрөтә. Улардан тыш, башҡа төркөмдәрҙә лә шөғөлләнергә була.

**А. Көмөшҡолов:** Студенттарҙың уҡыуҙан тыш тормошо тураһында әйткәндә, спорт залдарының бер ҡасан да буш тормауын билдәләп китергә кәрәк. Ғөмүмән, спорт залында киске 10-ға тиклем ут һүнмәй. Аҙнаһына ике тапҡыр уҡытыусылар ҙа волейбол уйнай, факультеттар араһында турнирҙар ҙа булып тора. Тимәк, күңелле йәшәү өсөн шарттар кәрәк, ә был шарттарҙы үҙебеҙҙән башҡа бирәү ҙә булдырмаясаҡ. Әлеге мәлдә 3 спортзал, Талҡаҫта студенттар, уҡытыусылар өсөн һаудонъя кимәлендә Рәсәйҙең үҙен күрһәтеп йөрөй алырҙар инеме? 2008 йылда буласаҡ иҡтисадсылар Сингапурҙа Рәсәй исеменән сығыш яһаны, былтыр октябрь айында беҙҙең студенттар Рәсәйҙә беренсе урын алып, Пекинға барҙы. Бындай уңыштар һәр бүлек студенттарында ла бар. Ай һайын Өфөгә, Ҡаҙанға, Новосибирскиға, Новокузнецкиға, Екатеринбургҡа, Санкт-Петербург һ.б. ҡалаларға сығып, үҙҙәренең һөҙөмтәләре менән беҙҙе ҡыуандырып торалар.

**А. Вәлиев:** Факультет деканы булараҡ, үҙебеҙҙең студенттар тураһында әйткәндә, улар уҡыу йылы тамамланыр алдынан ғына Өфөлә Мода аҙналығы сиктәрендә үткән "Йыл модельеры" Бөтөн Рәсәй конкурсында, Силәбелә үткән "Серебряная нить - ШИК и DIANAMODEN" XV Үҙешмәкәр һәм профессиональ тегенөсөн яҡшы белем алырға тейеш. Ә яҡшы белем бирер өсөн вуздың кадрҙары булырға тейеш. Әлеге мәлдә кадрҙарҙың 80 процентының ғилми дәрәжәһе бар тип әйттек бит инде. Икенсенән, белем биреү өсөн яҡшы шарттар кәрәк. Был йәһәттән дә маҡтана алабыҙ, лабораториялар төҙөлөп тора, әле тағы ла дөйөм майҙаны мең квадрат метр булған лаборатория яңы уҡыу йылына сафҡа инәсәк. Быйыл яңы йыл алдынан 1 миллион 300 меңлек грант отоп, яңы ҡоролмалар һатып алдыҡ.

Заман талап иткән һөнәрҙәргә килгәндә, технология факультетында өҫтөнлөклө йүнәлеш бар - "Транспорт-технологик машиналар һәм комплекстарҙы эксплуатациялау" тип атала ул. Ошо һөнәргә уҡырға ингәндәр инженер булып сыға. Быйыл беренсе сығарылыш булды ла инде.

**▶ Әлеге мәлдә Сибай институты "бакалавр" квалификациялы белгестәр әҙерләйме? Киләсәккә коллектив алдында ниндәй бурыстар ҡуйылған?**

**А. Көмөшҡолов:** Быйыл Сибай институтын бер юлы специалистар ҙа, йәғни 5 йыл уҡыған студенттар ҙа, бакалаврҙар ҙа тамамланы. Шуға ла Урал аръяғына, республикаға беҙ ҙур армия белгестәр әҙерләп сығарҙыҡ. Бөтөн Башҡортостан буйынса быйыл 26 мең белгес вуздарҙы тамамлаһа, Сибай институтын 1100 кеше уҡып бөттө. Йәки һәр 26-сы йәш белгес беҙҙең вузды тамамлаған. Улар үҙҙәренең конкурентлыҡҡа һәләтле булыуын хеҙмәт баҙарында күрһәтер, барыһы ла эшкә урынлаша алыр, тип ышанам. Бөтөн Рәсәйҙә 90-ға яҡын төбәк, шул 90 төбәктең 40-ында беҙәҙерләү йәһәтенән әҙерлек эштәре алып барабыҙ. Беҙҙең студенттарҙың икенсе юғары белемде лә бер юлы алып сығыуына баҫым яһайбыҙ. Әммә уҡытып, белем биреү генә төп маҡсат түгел, уларҙың эш таба алыуы ла кәрәк. Вуз иҡтисад менән тигеҙ атлап барырға тейеш. Илдең иҡтисадына күпме талап ителә, вуздарҙың һаны шунан артмаҫҡа тейештер. Шуға ла РФ Мәғариф һәм фән министрлығының студенттарға тейешле белем бирә алмаған юғары белем биреүсе уҡыу йорттарын иҫәпкә алырға тырышыуына аптырарға кәрәкмәй.

**▶ Сибай институтының республиканың башҡа вуздарынан тағы бер үҙенсәлек айыра икәнен беләбеҙ - бында бөтөн факультетта ла башҡорт теле дәресе уҡытыла. Быға нисек өлгәшәһегеҙ?**

**А. Көмөшҡолов:** Туған телен, республиканың төп халҡының телен белмәгән кеше тыуған ерен дә, илен дә ярата алмай. Туған телеңде яратыу - ул ватансылыҡ нигеҙҙәренең береһе. Ғилми советтың ҡарары менән һәр факультетта башҡорт теле уҡытыла. Студенттар башҡорт телен, башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады өлгөләрен, яҙыусыларыбыҙҙың әҫәрҙәрен өйрәнә, бынан уларҙың белеме арта ғына. Тел уҡытыуҙы бөтөн кимәлдәге закондар яҡлай, дәүләт телен уҡытырғамы, юҡмы икәнен вуз үҙе хәл итә. Йәғни, теләк булғанда, уны вариатив курс сиктәрендә өйрәнергә була.

**А. Вәлиев:** Башҡорт телен генә түгел, "Башҡортостан мәҙәниәте тарихы" фәнен дә барлыҡ студенттар уҡый. Башҡортостанда йәшәп, уның тарихын белмәйенсә лә булмай, быны студенттар ҙа, институт етәкселеге лә яҡшы аңлай. Бик теләп өйрәнгән фәндәренең береһе ул студенттарҙың. Ижади фекерләргә лә кеше ошо дәрестәрҙә өйрәнә.

# БУЛЫРҒА ТЕЙЕШ?

## институты һымаҡ!

ыҡтырыу базаһы, медицина үҙәге, тоҙ шахтаһы, теш табибы кабинеты эшләй. Яҡтыгүлдә һауыҡтырыу базаһы төҙөй башланыҡ. Был базаларҙа ял итеүселәр исемлегенә эләгеү өсөн тағы ла ябай ғына бер шартты үтәргә - яҡшы уҡырға, институт тормошонда әүҙем ҡатнашырға тейешһең.

**▶ Сибай институтына уҡырға килгән абитуриенттарҙың белем кимәле ниндәй? БДИ буйынса ҡуйылған балдар ысынбарлыҡҡа тап киләме?**

**А. Көмөшҡолов:** Дөрөҫөн әйткәндә, БДИ һөҙөмтәләре һәр ваҡытта ла объектив түгел. Был беренсе сессияла уҡ билдәле була. Ҡайһы бер студенттарҙы башҡорт теле, рус теле, математиканан ябай ғына нәмәләргә яңынан өйрәтергә тура килә. Шулай ҙа уҡырға килгән һәр студентҡа шатбыҙ, әгәр ҙә теләге булһа, һәр кеше тырышып уҡып китә ала, бының өсөн бында бөтөн шарттар бар. Һәр студенттан ҙур шәхес, яҡшы белгес тәрбиәләп була, шуға ла беҙҙең уҡытыусылар өсөн көсһөҙ, белеме һай студенттар юҡ.

**А. Вәлиев**: Сибайҙа урынлашһаҡ та, институтҡа уҡырға инеү өсөн конкурс ҙур була. Шуға ла төбәк вузы тип ҡарарға ярамай уға. Ҡайһы бер атаәсә балаһын ҙурыраҡ ҡалаларҙа уҡыта. Мәҫәлән, Мәскәүҙә йәки Санкт-Петербургта бөгөнгө заманда бөтөнләй кәрәк булмаған һөнәргә уҡып йөрөгәнгә ҡарағанда, Сибай институтында кәрәкле һөнәр үҙләштереү күпкә яҡшыраҡ.

**А. Көмөшҡолов:** Студенттарҙың белеме юғары, шулай булмаһа, Рәсәйҙә генә түгел, селәр төбәк конкурсында ҡатнаштылар.

**▶ Заманса һөнәрҙәр тураһындағы фекерҙе дауам иткәндә, бөгөн хеҙмәт баҙарында ниндәй һөнәрҙәр абруйлы иҫәпләнә? Юрист һәм иҡтисадсы һөнәренә мода үтмәнеме әле?**

**А. Көмөшҡолов:** Бер ваҡыт белемле юристар һәм иҡтисадсылар күп, әммә уларға эш юҡ, тигән фекер нығынып киткәйне. Әммә практика күрһәтеүенсә, йәмғиәттә юриспруденция менән иҡтисад фәне гел актуаль. Бюджет урындары әҙ булһа ла, был бүлектәргә түләп уҡырға риза булған студенттар күпләп килә. Тәбиғи һөнәрҙәрҙән биология, экология, тәбиғәттән файҙаланыу, география алдан бара. Уҡытыусылар ҙа, педагог-психологтар, башланғыс класс уҡытыусылары, балалар баҡсалары өсөн юғары белемле тәрбиәселәр, музыканттар, технология уҡытыусылары, эшҡыуарлыҡ бүлеге ҙур һорау менән файҙаланыла.

**А. Вәлиев:** Белгес конкурентлыҡҡа һәләтле булһын



Был төбәктә тау-мәғдән сәнәғәте үҫешә, Учалы, Хәйбулла-ла урынлашҡан шахталарҙа ҡулланылған машиналар өсөн инженерҙар күпләп талап ителә. Күтәреүсе машиналар, конвейерҙар шулай уҡ технологик транспортҡа ҡарай. Ситкә сығып эшләйем тиһәләр, шулай уҡ инженер белеме ярап ҡала. Себер яҡтарына китһәләр ҙә, белеме булмаған кешегә ҡарағанда, белемле белгес күпкә юғары баһалана. "Газпром"-да, "Транснефть" ойошмаһында беҙҙең сығарылыш уҡыусылары күпләп эшләй, сөнки унда шул уҡ экскаваторҙар, торба һалыусы машиналарҙы белеү кәрәк. Күптәр был һөнәргә Сибай институтында уҡытҡандарын белмәй ҙә, бының өсөн мотлаҡ Өфө дәүләт нефть техник университетына барырға кәрәк, тип уйлай. Унда, әлбиттә, инженерҙар әҙерләйҙәр, әммә эксплуатация буйынса инженерҙарға уҡытмайҙар. Йыл һайын көндөҙгө бүлеккә лә студенттар йыябыҙ, ситтән тороп уҡыу бүлегенә лә киләләр. Уларҙың 70-80 проценты тау сәнәғәтендә эшләй, ҡалған 30-20 проценты, алдан әйтеүемсә, газ, нефть йүнәлешендә.

***Белгес конкурентлыҡҡа һәләтле булһын өсөн яҡшы белем алырға тейеш. Ә яҡшы белем бирер өсөн вуздың кадрҙары булырға тейеш. Әлеге мәлдә кадрҙарҙың 80 процентының ғилми дәрәжәһе бар тип әйттек бит инде. Икенсенән, белем биреү өсөн яҡшы шарттар кәрәк. Был йәһәттән дә маҡтана алабыҙ, лабораториялар төҙөлөп тора, әле тағы ла дөйөм майҙаны мең квадрат метр булған лаборатория яңы уҡыу йылына сафҡа инәсәк. Быйыл яңы йыл алдынан 1 миллион 300 меңлек грант отоп, яңы ҡоролмалар һатып алдыҡ. Технология факультетында өҫтөнлөклө йүнәлеш бар - "Транспорт-технологик машиналар һәм комплекстарҙы эксплуатациялау" тип атала ул. Ошо һөнәргә уҡырға ингәндәр инженер булып сыға.***

ҙең студенттар эшләй. Быйылғы йәш белгестәр ҙә үҙҙәрен һынатмаҫ. Уңыштың кимәле тураһында, ғәҙәттә, көҙөн һөйләйҙәр, яңы уҡыу йылы башланыуға беҙ ҙә теүәл картинаны күҙ алдына килтерә аласаҡбыҙ. "Бакалавр" квалификациялылар араһында белемен башҡа вуздарҙа, магистратурала дауам итеүселәр ҙә күп буласаҡ. Сибай институтының үҙендә лә магистратураға лицензия алыу буйынса эш башланды. Иң тәүҙә иҡтисад, педагогика, биология йүнәлешендә магистрҙар әҙерләнер, сөнки был бүлектәр ғилми статусҡа эйә кадрҙар менән тәьмин ителгән. Параллель рәүештә эшсе һөнәрҙәрен

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ниндәй генә ауыр мәлдәрҙә йәшәгәндә лә халҡыбыҙ белемдең, белемле кешеләренең ҡәҙерен белгән. Бөгөнгө заман да мәғариф усаҡтарын төрлө һынауҙар алдына ҡуя икән, быға зарланып ҡына үҙебеҙгә ярҙам итә алмаясаҡбыҙ. Беҙ үҙ балаларыбыҙҙы милли рухта белем алыуын хәстәрләп, үҙ вуздарыбыҙҙа уҡытып ҡына уҡыу йорттарыбыҙҙы һаҡлауға булышлыҡ итә алабыҙ. Әңгәмәселәребеҙ билдәләүенсә, әгәр ҙә вуз уҡытып сығарған белгестәр хеҙмәт баҙарында үҙ урынын таба ала икән - был уҡыу йортоноң үҙ бурыстарын теүәл һәм дөрөҫ үтәүе күрһәткесе булып тора. Вуздағы яйға һалынған ғилми эшмәкәрлек, уҡытыусыларҙың һәм студенттарҙың халыҡ-ара кимәлгә сығыуы, кадрҙарҙың үҙ эшенә яуаплы ҡарауы - былар барыһы ла Сибай институтының киләсәгенә ныҡлы нигеҙ һала. Әйткәндәй, РФ мәғариф һәм фән министрлығы үткәргән 2015 йылдағы иң һөҙөмтәле вуздар исемлегендә Сибай институты ла бар.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

*✓ - Иптәшеңә ниңә берәйһен димләмәйһең? - тип һорап ҡуйҙым. - Димләп алып биргәйнем дә ул... килеберәк сыҡманы. Ниңә икәнен үҙенән һөйләтербеҙ. Ят кешегә бик асылып бармаһа, тел асҡысы - минең сумкала, - тине күҙен ҡыҫып.*



Мөҙәрис БАГАЕВ

# ЯҘМЫШТАР



## 1. КИЛЕН

Яҡын ғына дуҫ кешем Мансур: "Тау яҡтарында йөрөп ҡайтырға иҫәбең юҡмы, хикәйә-фәләндәрең өсөн әллә күпме хәл-ваҡиғалар туплап ҡайтыр инең", - тип күптән саҡырһа ла, донъя мәшәҡәттәренән бушап, сәфәр сығырға форсат теймәйерәк торҙо. Төҙөлөш менән булышыу, бигерәк тә умарталар байтаҡ көс талап итә шул. Ер өҫтөнә тәүге ҡар яҡкас ҡына, ябаһын-ябып, урынлаштыраһын-урынлаштырып, аҙ-маҙ тын алып ҡалаһың һәм беҙгә ноябрь аҙаҡтарында ғына юлға сығырға насип булды.

Ишембайҙың тирә-яғы ала-лы-ҡолалы булып ятһа ла, беҙ бараһы ерҙәр, йәғни тау яҡтары, күптән инде ҡышҡы кейемгә төрөнгән. Йәйгеһен бигерәк тә ямғырҙарҙан һуң йөрөүе ауыр булған соҡор-саҡырлы юлды ла ҡар аҙмы-күпме тигеҙләп, һәүетемсә генә үткеле яһаған.

Тау-урман араһына килеп инһәм, минең, дала яҡтарында тыуып-үҫкән кешенең, тыным тарлыға, тирә-йүнгә шикләнеберәк ҡарай башлайым. Ә Мансурҙың, киреһенсә, күҙ ҡараштары йәнләнеп, үҙ-үҙен тотошо бөтөнләй икенселәнеп китте. Дәртләнә биреп, юлда осраған тау-йылғаларҙың исемдәрен атай барып, улар хаҡында әллә күпме тарих һөйләп ташланы. Юлдашым үҙе лә шул яҡтан булып, эше буйынса ла был тирәләрҙе арҡырыға-буй күп үткән әҙәм. Ҡаршыбыҙға тап булған һәр таш, һәр ағас уға таныштыр һымаҡ тойолдо миңә.

Төш етәрәк ҙур ғына ауылға барып керҙек. Мансур машинаһын бер таш йорт алдында туҡтатты ла, тиҙ генә йомошомдо йомошлап сығайым, тип, шунда урынлашҡан ауыл хакимиәтенә инеп китте һәм бер нисә минуттан кире әйләнеп сыҡты.

- Түрә өйҙә юҡ икән, ҡайтышлай һуғылырбыҙ, - тине ул машинаһына инеп ултырып.

- Ә хәҙер ҡайҙа? - тигән һорауыма Мансур тәүҙә өндәшмәйерәк ҡалды. Тар ғына бер урамға боролғас:

- Әхмәт иптәшкә барабыҙ инде. Бик шәп, ҡунаҡсыл кеше, үҙе оҫта һунарсы. Мышы атырға рөхсәт ҡағыҙы алғайным, шуға ҡасан барырға икәнен дә һөйләшербеҙ, - тип яуап бирҙе ул.

Беҙ йыуан ғына уҫаҡ бүрәнәләрҙән һалынған ҙур йорт алдына килеп туҡтаныҡ. Мин ауылдағы өйҙәрҙең күбеһенең уҫаҡтан икәненә иғтибар иткәйнем.

- Өҫтәренә ҡарағай ауырға тора, нишләп ҡарағай йорттар һирәк-мирәк кенә? - тип һорай һалдым.

- Ҡарағайҙан ағас күрмәгән кеше генә һалһын! Элек-электән ата-бабаларыбыҙ уҫаҡтың лечебный икәнен белеп, өйҙәрен шунан төҙөгән. Хәтереңә теркәп ҡуй, - тип яуапланы юлдашым.

Ҡапҡанан инеүгә беҙҙе бер ҙур эт лауҡылдап ҡаршы алды. Мансурҙың: "Барыс, нельзя!" - тигәнен ишетеү менән эт уны таныны, буғай, өрөүенән туҡтап, ҡойроғон бер-ике болғап алды ла, ситкәрәк китеп баҫты. Ул да булмай, аҙбарҙан ҡулына һәнәк тотҡан өлкән генә тип әйтерлек йәштәге ир килеп сыҡты.

- Әйҙүкләп, - тине ул беҙҙең менән ике ҡуллап күрешеп.

Бер аҙ хәл-әхүәл хаҡында белешеп торғас, Әхмәт:

- Һеҙ өйгә инегеҙ, килен сәй эсерә торор. Мин малдарға курмы ғына бирәм дә... - тип һәнәген ҡулына алды.

- Килен, тиһең инде? - тине уға Мансур сәйерерәк йылмайып.

Әхмәт, нисектер, уңайһыҙланыбыраҡ беҙгә күҙ ташланы ла, боролоп, аҙбарға ҡарай атланы.

Ишектән инеүебеҙгә оло яҡтан "олатай" тип ун йәштәр самаһындағы малай йүгереп килеп сыҡты ла беҙҙе күреп туҡтап ҡалды. Һәм бер аҙ торғас, кире инеп китте. Уның шым ғына: "Әсәй, бабайҙар килгән", - тигәне ҡолаҡҡа салынып ҡалды. Ул да булмай, урта ишектә имсәк балаһын күтәргән йәш кенә ҡатын күренде.

- Ә-ә, Мансур бабайыңдар бит, әйҙәгеҙ, үтегеҙ, - тине ул беҙгә асыҡ йылмайып һәм баланы артынан эйәреп сыҡҡан малайға тотторҙо ла газ плитәһе янында ҡайнаша башланы.

Беҙ сисенеп оло яҡҡа уҙҙыҡ. Унда иҙәнгә түшәлгән балаҫ өҫтөндә өс йәштәр самаһындағы малай уйнап ултыра ине. Ул беҙгә ятһыныбыраҡ ҡарап ултырҙы ла тағы ла уйынсыҡтарына йәбеште. Мин ингәс тә рамдарға ҡуйып эленгән стеналағы фотоларға иғтибар иттем. Кемгә генә инһәм дә, боронғо ла, яңыраҡ төшөрөлгән дә ошондай фотоһүрәттәрҙе байҡап сығырға тотона инем. Улар үҙҙәре өнһөҙ генә был ғаиләнең тарихын һөйләгән һымаҡ тойола ине.

Мансур йәнәшәмә баҫып, һәр фото менән таныштырып барҙы. Моңһоу ғына ҡарашлы урта йәштәрҙәге ҡатындың һүрәтенә күрһәтеп, ул:

- Быныһы - Йәмилә, Әхмәттең ҡатыны. Хәҙер мәрхүмә инде, - тине.

Икенсе бер фотола урталарына сабый бала алып ултырған әлеге килен менән мөһабәт кәүҙәле йәш кенә ир һүрәтләнгәйне. Мин уға күрһәтеп:

- Улымы, ҡайҙа эшләп йөрөй? - тип һораным.

- Улы... ул да ер ҡуйынында инде хәҙер, - тип шымыраҡ тауыш менән яуапланы Мансур.

Беҙ фотолар ҡараған арала килен кеше өҫтәл әҙерләп ҡуйғайны. Табынға ултырыуыбыҙға Әхмәт тә килеп инде.

- Мунсаны ла тоҡандырып ебәрҙем. Рәхәтләнеп ауыл мунсаһында йыуынырһығыҙ, - тине ул өҫтәл артына инә-инә.

- Һаман шул ҡара мунсаңмы әле? - тип һорай һалды Мансур.

-Төтөн еҫе һеңдереп тә сыҡмағас, ниндәй мунса инеү була ул? Ағында Ишембайыңа ҡайтҡас йыуынырһың, - тине Әхмәт көләмһерәй биреп.

Беҙ сәй эсә башлау менән иҙәндә уйнап ултырған малай, урынынан тороп, Әхмәт янына килде лә:

- Атай, мәмәй, - тип өҫтәлгә ҡулын һуҙҙы. Әхмәт һауыттан ҡағыҙлы кәнфит алып, малайға тотторҙо ла, арҡаһынан яратып ҡуйҙы.

Сәй эсеп алғас, диванға ҡунаҡлап, байтаҡ ҡына әңгәмә ҡороп ултырҙыҡ. Әхмәт урман эше туҡтатылғас, ауыл халҡының бөгөнгө көндә башлыса мал-тыуар аҫрап көн күреүен, үҙенең дә тиҫтәгә яҡын баш мал тотоуын әйтеп һалды.

- Был хөкүмәтте аңламаҫһың, төрлө закондар сығарып, ауыл кешеһенә аяҡ салырға әҙер генә торған һымаҡ, - тине ул. - Яңыраҡ ҡына малдарҙы тәғәйен бер урынға илтеп, шунда ғына һуйҙыртырға тейеш, тигәне сыҡты. Шунһыҙ баҙарға индермәйҙәр, йәнәһе. Бына мин тере малды алып барыу өсөн ҡайҙан йөк машинаһы табайым? Тапҡан хәлдә лә уларҙы машинаға тейәүе бер этлек. Унан килеп расходы әллә күпме. Ит алтынға төшәсәк бит, шунан унда беҙҙең һымаҡ "Бисмилла"һын әйтеп, доғаһын уҡып һуялармы икән әле? Эсәк-фәләнен нишләтмәк кәрәк? Бигерәк тә йәйен кире алып ҡайтып еткереп йыуғансы, еҫләнеп бөтәсәк бит.

Әхмәттең әсенеп әйткәндәренә Мансур:

-Һеҙҙең иҫәптән кемдәрҙер кеҫә ҡалынайтырға уйлай инде. Бында ришүәтселеккә лә юл асыласағы көн кеүек асыҡ, - тип өҫтәп ҡуйҙы.

Ҡайын менән имән миндектәрен алмаштыра-алмаштыра сабынып, оҙаҡ ҡына мунса инеп сыҡтыҡ. Шунда бер арала Мансурҙан:

- Иптәшең ҡатынһыҙ йәшәйме ни инде хәҙер, ниңә берәйһен димләмәйһең? - тип һорап ҡуйҙым.

- Димләп алып биргәйнем дә ул... килеберәк сыҡманы. Ниңә икәнен үҙенән һөйләтербеҙ. Ят кешегә бик асылып бармаһа, тел асҡысы - минең сумкала, - тине күҙен ҡыҫып.

Беҙ мунсанан сыҡҡанда ҡараңғы ла төшә башлағайны. Артыбыҙҙа уҡ Әхмәт тә тиҙ генә йыуынып сыға һалды. Килен өҫтәлгә мул итеп табын әҙерләп ҡуйғайны. Беҙ ултырып бөтөү менән ул боҫо борҡоп торған бер табаҡ ит килтереп ҡуйып:

- Инде беҙ йыуынып сығайыҡ, - тип, балаларын алып мунсаға китеп барҙы.

Мансурҙың әйткәне раҫ килде. Уның: "Бына яҙыусы ағайыңа тормошоңдо һөйләп ебәр әле, атыу минән һоранып бер була", - тиеүенә тәүҙәрәк иптәше ыҡ-мыҡ итеберәк торғайны, ҡыҙмасараҡ булып алғас, теле үҙенән-үҙе асылды. Бына ниҙәр ишеттем мин уның ауыҙынан.

...Әхмәт бынан ун ике саҡрымда ятҡан, инде юҡҡа сыҡҡан ауылда тыуып үҫә. Шунда һигеҙ класты тамамлағас, урман хужалығына эшкә керә. Йәше еткәс, әрмелә лә булып ҡайта. Күршеләрендә генә йәшәгән Әсмә исемле ҡыҙға өйләнеп, матур ғына итеп донъя көтөп алып китәләр. Ләкин бәхеткә сумып, ҡыуанысҡа төрөнөп оҙаҡ йәшәргә яҙмай йәш ғаиләгә. Әсмә алты килоға яҡын бәһлеүән малай табып, күп ҡан юғалтыуҙан мандый алмай, үлеп ҡуя. Был хәл февраль айында юл өҙөлгән ваҡытҡа тап килеп, йәш әсәне дауаханаға илтә алмай ҡалалар. Бала өләсәһе тәрбиәһенә тороп ҡала. Заһирҙы һыйыр һөтө менән туйындыралар. "Барыбер балам имеп бөтмәй, һауып әрәм итәм", тип ҡаршыларында йәшәгән Зифа исемле ҡатын да ара-тирә имеҙгеләп китә. Ауырыу әсәһенә имсәк баланы ҡарауы ауырға төшә. Шуға ла Әхмәткә был эште күберәк үҙенә атҡарырға тура килә. Заһирға ярты йәш самаһы булғас, ҡәйнәһе: "Ҡоҙағыйҙың да рәте юҡ, ир кеше ир кеше инде ул, бала етемлекте тоймаһын", - тип икенсе ҡыҙын, ун алтыһы саҡ тулған Йәмиләне, Әхмәткә димләй. Әхмәт уныбыны уйлап тормай, балдыҙына өйләнеп ҡуя. Былай һәүетемсә генә йәшәп алып китәләр. Ҡан барыбер тарта, тиҙәр бит - былай ҙа кергеләп, сабыйҙы тәрбиәләшеп йөрөгән Йәмилә баланы үҙенекеләй күреп, бар булмышын уға бирә. Заһирҙың теле лә яңы әсәһенә ҡарап "әннә" тип асыла. Ләкин эскерһеҙлеге, мәрхәмәтлелеге баштан ашҡан, бала күңелле Йәмиләне Хоҙай бәпес табыуҙан мәхрүм иткән булып сыға. Күпме йәшәһәләр ҙә ҡатын ауырға ҡала алмай. Им-томсоларға ла, дауаханаға ла барып ҡарайҙар, ләкин файҙаһы теймәй. Бер күрәҙәсе әбей: "Юҡҡа өмөтләнеп, ваҡыт уҙғарып йөрөмә, бер улың бар бит инде, ҡыҫҡа ғына ғүмереңде шуны тәрбиәләүгә, кеше итеүгә арна", - тип ҡайтарғас, башҡа бер ергә лә бармаҫ булалар. Әбейҙең "ҡыҫҡа ғына ғүмереңде" тигәнен Йәмилә аңғармайыраҡ ҡалһа ла, ул Әхмәттең күңеленә һеңеп ҡалып, йөрәген өйкәштереп торор була.

Шулай йылдар үтә. Заһир ҙа аҡрынлап егет ҡорона инә. Петровскиҙа уҡып, тракторсы һөнәрен үҙләштерә. Әрмелә хеҙмәт итеп тә ҡайта. Аҙаҡ ул да урман хужалығында эшләй башлай. Айыуҙай таҙа кәүҙәле, бер күреүҙә ҡыҙҙарҙы ғашиҡ итерҙәй, матур йөҙлө егеткә ҡарап һоҡланмаған кеше ҡалмай. Бик күп ҡыҙҙар уны төштәрендә күреп һаташҡандыр, моғайын. Әммә Заһир Әминәне, бына ошо килендәрен, һайлай. Матур ғына итеп туй үткәрәләр. Әминә атайһыҙ ҡалып, әсәһе тәрбиәһендә генә үҫкән ҡыҙ була. Ҡоҙағыйҙары уны башлы-күҙле итеү менән өйөн һатып, күрше ауылдағы бер бабайға кейәүгә сығып китә. Оҙаҡ та үтмәй өйҙәренә оло ҡыуаныс килтереп, Әминә малай табып бирә. Килененән бигерәк Йәмилә ейәнен ҡулынан да төшөрмәй тиерлек.

Ошоларҙы һөйләп биргәс, Әхмәт һүҙенән туҡтап ҡалды. Шул арала ике балаһын эйәртеп, килене лә мунсанан ҡайтып керҙе һәм инеү менән бишектә йоҡлап ятҡан сабыйға ымлап:

- Нәркәс уянманымы? - тип һорай һалды.

- Юҡ, тауыш-тыны сыҡманы, - тине Әхмәт.

- Улайһа, мин бәләкәй яҡта ғына балаларҙы ашатып, йоҡларға һалайым, - тип Әминә малайҙарын эйәртеп сығып, урта ишекте ябып ҡуйҙы.

Әхмәт бер аҙ шым ултырғас ҡына һүҙ башланы:

- Шулай матур ғына йәшәп ята инек тә бит, Йәмилә ҡапыл ғына сирләп китте. Ат егеп балнисҡа сығарайым тигәйнем, малай: "Уның менән ҡасан барып етәһең, үҙем генә алып барам", - тип матайын тоҡандырҙы. Какырас ҡойма ямғыр яуып киткәйне, тәгәрмәсе тайып китеп, Ҡараташ аҫтына ҡолағандар... Бер көндө ҡатынымды ла, улымды ла ерләнем... - Был һүҙҙәрҙе әйткәндә Әхмәт нисектер шиңеп, бөршәйеп ҡалғандай күренде. Тауышы ла ҡалтырана биреп, ишетелер-ишетелмәҫлек кенә сыҡты. - Шунда донъям бөтөнләй емерелгәндәй тойолдо минең. Ул килен һыҡтай, уға күрһәтмәй генә мин илайым. Байтаҡ аңыбыҙға килә алмай бер булдыҡ. Әлдә йыуанысҡа ейәнем бар ине, ул булмаһа, нишләр инек икән, - тип һүҙен дауам итте Әхмәт. - Аҡрынлап күңел һыҙлауҙары баҫылды-баҫылыуын, әммә барыбер ҡанаты һынған ҡош хәлендә инек. Килен мине йәлләптер инде: "Берәй ҡатынды әйттереп ҡарамайһыңмы, ҡайным", - тип

✓ *Айҙар Байыҡ исемендәге Республика сәсәндәр бәйгеһе ҡатнашыусылары Салауат еренә килеүҙәренә ифрат шатланып, күңелдәре үҫеп, рухланып, яңы ижади үрҙәр яуларға ҡанатланып ҡайтты.*

әйткеләп алғыланы-алыуын. Әмин йәш кенә көйө яңғыҙ ғүмере үтә, тип, уны йәлләйем. Шулай ике йыл самаһы йәшәгәс, килен: "Ҡайным, анау Әхмәҙи һоратырға килә, ти. Күңелем бик тартмаһа ла, шуға сығайым да ҡуяйыммы икән?" - тип кәңәш һорағандай итте. Мин, үҙең беләһең, тигәндәй, яурындарымды ғына һелкеттем. Холҡо самалы, инде бисә күрмәй ҡырҡты ҡыуалаған Әхмәҙиҙең Әминәгә бәйләнеп йөрөгәнен ишеткеләгәйнем инде. Киленде лә уға бирәһе, ейәнемде лә яндан бик ебәрәһе килмәй ине лә бит, нишләйһең инде. Үҙенде генә ҡайғыртып йәшәп булмай. Аҙаҡ, белеүемсә, килен, беҙ булғанға өйләнмәй йөрөйҙәр, тип күңеле ятмаған кешегә кейәүгә сығырға ризалашҡан. Ысынлап та, яңғыҙлыҡтың үҙәктәргә үтерлек икәнен шул саҡ тойҙом. Иңәһеҙ ҡалған ата ҡаҙҙай ҡайҙа һуғыларға белмәй йөрөгәндә...

- Бына был иптәш килеп керҙе һәм бик шәп бисә ҡоҙаланы, тип әйт, - тине шунда Мансур өй хужаһын бүлдереп.

- Бисә шәп ине лә ул, ләкин ҡала кешеһе төпкөл ауылда йәшәргә сыҙаманы, бер йылға ла бармай, кире һыпыртты, - тине Әхмәт көләмһерәй биреп. - Тағы ла яңғыҙ ҡалдым инде, тигәндә, ейәнемде етәкләп, күҙе-башы күгәргән килен ҡайтып инде. "Холҡон күрһәтеп, тота ла йоҙроҡтарын йомарлай, етмәһә, балаға ҡул күтәрә башланы. Үҙенең бәүеле тотмай, уның һыҡраһын таҙартыуҙан тамам туйҙым", - тине ул яурыныма башын һалып илай-илай.

Киленемдең минең өсөн бик тә ҡәҙерле, яҡын кеше булыуын Әхмәҙи алып киткәс тә нык тойғайным инде. Хәҙер ейәнем менән ҡайтып кергәс, өйөмә генә түгел, күңелемә нур инеп, яҡтырып киткәндәй булды. Килен дә тотҡондан ҡотолған ишеләй, осоп-ҡанатланып йөрөй башланы. Үҙемә лә дәртдарман инеп киткәнен тойҙом. Оят булһа ла әйтәйем инде, шайтан ҡоторттомо икән, ара-тирә киленгә ҡарап: "Их!" - тип тә алғылай инем. Бер ярты йыл самаһы үткәс, Әминә уйымды һиҙгәндәй: "Ҡайным, кеше барыбер бергә йәшәйҙәр икән, тиеберәк һөйләй, әллә ҡауышайыҡ та ҡуяйыҡмы", - тип хәбәр һалмаһынмы. Үҙе ҡып-ҡыҙыл булып, күҙҙәрен ҡайҙа ҡуйырға белмәй. Мин ни тиергә лә башыма килмәй, таш кеүек ҡаттым да ҡалдым. Йөрәк йәш егеттәрҙеке һимаҡ ашҡынып типһә лә, баламдың ҡатыны бит, тип үҙ-үҙемде тыйырға тырышам. Шулай ҙа сыҙаманым - Хоҙайҙан рөхсәт һорап, никах уҡытып ҡуйыҡ. Ауыл бөтә башлағас, бында өй һалып күсенеп килдек. Яҙмышыбыҙ шул булғандыр инде.

Әхмәт һөйләп бөткәндә төн уртаһы яҡынлашҡайны. Әминә Мансур менән икебеҙгә оло яҡта урын түшәй башланы. Әхмәт һөйләгәндәрҙе ишеткәс, ул миңә хәҙер бөтөнләй икенсе кешеләй булып күренде. Үҙен күҙәткәнде һиҙгәндәй, ҡатын минә боролоп, оялсан ҡарашын ташлап алды ла, эшен бөтөрөп, тиҙ генә бәләкәй яҡҡа сығып китте...

**(Дауамы бар).**

**ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!**

**Үткән шәмбелә Салауат районында халҡын рух азатлығына, ирекkә әйҙәүсе батыр, сәсән-импровизатор, юлбашсы Салауат Юлаевтың тыуыуына 261 йыл тулыу айҡанлы "Салауат йыйыны" фольклор байрамы үткәрелде. Быйыл ул район кимәлендә генә уҙғарылыуына ҡарамаҫтан, Башҡортостандың төрлө төбәктәренән һәм күрше өлкәләрҙән милләттәштәрҙе бергә йыйҙы. Әҙәбиәт йылына, Салауат районы булдырылыуға 80 йыл, Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүгә 70 йыл тулыуға ла бағышланған күләмле байрам илһөйәрлек, рух көсө, батырлыҡ тәрбиәләүсе сара булыуын тағы бер ҡат итбаҫланы.**



# БАТЫР ТӨБӘГЕНДӘ БЕР КӨН,

## йәғни Салауат ерендәге байрам тәьҫораттары

Байрамға килеүселәр өсөн иң ҡыҙыҡлыһы, фәһемлеһе, моғайын, театрлаштырылған тамашаны күҙәтеүҙәр. Был юлы йыйындың төп тамашаһы башҡорт халҡының тарихи үткәненә байҡау яһаны, ил күргән ауырлыҡтарҙа быуындар араһындағы рухи бәйләнеште сағылдырҙы. XIV-XV быуаттарҙа ошо төбәктә йәшәгән Хәйерзаман әүлиә менән Ғайса әүлиәнең башҡорт халҡының азатлыҡ, ил ирке өсөн көрәшеп үткән шанлы һәм данлы тарихын бәйән итеүе тәбиғи рәүештә йыр-моң һәм бейеү менән үрелеп барҙы. "Матур әҙәбиәт - халҡым күңеле" тип аталған тамашаның сценарий авторы Салауат районынан сәсән телле, оҙаҡ йылдар дауамында башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләгән Флорис Ғайсин әйтеүенсә, был сығыштар йәш быуында илһөйәрлек, азатлыҡ рухы тәрбиәләүҙе, китап уҡыуға һәм тарихты өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныуы тыуҙырыуҙы маҡсат итеп ҡуйған.

Быуаттар дауамында башҡорт халҡының Рус дәүләтенә бәлә килгәндә уның төп яҡлаусыларының береһе буласағы тураһындағы антына тоғро ҡалыуы күптәрҙе һоҡландыра. Шул дәүләт хакимдары тарафынан үҙенең хоҡуҡтары ҡыҫырыҡланһа ла, аҫыл ир-егеттәренә "яуыз, ихтилалсы, хыянатсы" мөһөрө баҫылһа ла, дөйөм илгә яу килгәндә бөтә йәберҙәрен онотоп, беренселәрҙән булып ҡулына ҡорал алған атабабаларыбыҙ. Был, моғайын, башҡорт өсөн иң ҡәҙерлеһе - тыуған ере, азатлыҡ булғанлыҡтан да киләлер. Әммә һәр заманда ла үҙенең мәнфәғәттәрен башҡорт тик үҙе генә яҡлаған. Бөгөн дә ул ситтән, кемдәндер ярҙам өмөт итеү файҙаһыҙ икәнен, туған телен, мәҙәниәтен, ер-һыуын ҡәҙерләү, һаҡлау бары тик уның үҙенең бурысы икәнен аңларға тейеш. Ошо бурыс, ошо маҡсат тирәләй берләшергә тейеш. "Салауат йыйыны"ндағы тамаша ошо хәҡиҡәткә лә тағы бер тапҡыр төшөндөрҙө.

Быйылғы "Салауат йыйыны" фольклор байрамында тәүге тапҡыр Айҙар Байыҡ сәсән исемендәге Республика сәсәндәр бәйгеһе уҙғарылды. Дөрөҫөрәге, БР Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге һәм уның Сәсәндәр үҙәге ярҙамында "Киске Өфө" гәзитендә һәм "Шоңҡар" журналында ойошторолған сәсәндәр әйтешенә байрамда йомғаҡ яһалды. "Киске Өфө" гәзите биттәрендә һәм интернетта "Башҡорт ҡатын-ҡыҙы" сайтында барған әйтештә 15-ләп кеше ҡатнашҡайны. Гәзит уҡыусыларыбыҙ уларҙы гәзит битттәрендә лә уҡып, әйтеш барышын күҙәтеп барҙы. Тик әйтештә ҡатнашыусылар псевдонимдар менән сығыш яһаны. Бына был юлы әйтештә еңеүселәрҙең "битлектәре" асылды, йәғни бәйгенең Гран-приһына лайыҡ булыусы Өшөрә - ул танылған шағир һәм йәмәғәт эшмәкәре Гүзәл Ситдиҡова, беренсе урынға лайыҡ булыусы Көфө - ул шулай уҡ танылған яҙыусы-журналист Әхмәр Үтәбай, Шеш - ул Ырымбур ҡалаһынан Даут Амангилдин, икенсе урынға лайыҡ булыусыларҙан Айыткужа - ул Баймаҡ районы Икенсе Этҡол ауылынан Әкрәм Ҡәйепҡолов, Йәнһылыу - ул Байым ауылынан Таңһылыу Вәлиева икәне асыҡланды. "Шоңҡар" журналы үткәргән әйтеш бәйгеһендә иһә егермеләп кеше ҡатнашты һәм уларҙың һигеҙе еңеүсе булып танылып, төрлө номинацияларҙа бүләкләнде. Улар араһынан Фәүзиә Ҡотлогилдина (Ғафури районы), Рөстәм Нуриев (Өфө ҡалаһы), Фларис Ғайсин (Салауат районы), Зилә Хоҙайбирҙина (Ҡырмыҫҡалы районы) икенсе, өсөнсө урындарҙы бүлеште.

Байрам сәхнәһендә әйтештә ҡатнашыусы сәсәндәрҙе бүләкләгәндән һуң, Әхмәр Үтәбай Гүзәл Ситдиҡова, Әкрәм Ҡәйепҡолов, Таңһылыу Вәлиеваларҙы әйтешкә саҡырҙы. Был әйтештә күтәрелгән тема буйынса аҙаҡ башҡалар ҙа үҙ фекерҙәрен шиғри юлға һалды. Шулай ҙа был юлы сәсәндәрҙең ҡара-ҡаршы әйтеше ваҡытында тапҡыр яуаптар һирәгерәк яңғыраны. Әхмәр Үтәбай (Көфө сәсән) әйтеүенсә, философик уйланыуҙар талап иткән һорау биреп, уға яуап алыу еңелдән түгел, сөнки заман үҙгәреп, кешеләрҙең йәнле һөйләшеүҙән виртуаль аралашыуға күсеүе кешеләргә сәсәнлекте юйып бөтөрә яҙған: "Сәсәнлек айҙар буйына зиһенде үткерләп, телде сарлап, бер туктауһыҙ күнекмәләр яһауҙы талап итә. Беҙ күптән иң мөһим мәғлүмәттәрҙе, хәл-ваҡиғаларға ҡағылышлы уй-фекерҙәребеҙҙе ҡағыҙға теркәп барырға күнеккәнбеҙ. Етмәһә, виртуаль аралашыу башланыҡ", - ти Көфө сәсән.

Шулай ҙа, Айҙар Байыҡ исемендәге Республика сәсәндәр бәйгеһе ҡатнашыусылары Салауат еренә килеүҙәренә ифрат шатланып, күңелдәре үҫеп, рухланып, яңы ижади үрҙәр яуларға ҡанатланып ҡайтты. Әинде ойоштороусылар киләсәктә халыҡ ижадының был йүнәлешен тергеҙеү йәһәтенән яңы таланттар эҙләү, Республика халыҡ ижады үҙәгенең Сәсәндәр үҙәгендә тәжрибә уртаҡлашыуҙар үткәреү тураһында белдерҙе. "Ҡыҙғаныҫҡа күрә, бөгөнгө көндә бик талантлы шәхестәребеҙ булғанда ла власть даирәһендә лә, халыҡ араһында ла танылыу тапҡан, һүҙен тыңлата һәм артынан эйәртә алған сәсәндәр юҡ. Беҙ әле халыҡ фекерен халыҡҡа ғына еткерә алабыҙ, юғарылар беҙҙе ишетмәй. Бындай бәйгеләр киләсәктә ошо мәсьәләләрҙе хәл итергә булышыр, тип ышанабыҙ", - тине "Шоңҡар" журналының баш мөхәррире Мөнир Ҡунафин. Башланған эш - бөткән эш тигәндәй, шағир-импровизатор, булғадир Салауат Юлаев ерендә тәү башлап һулыш алып торған матур башланғыс киләсәктә үҫеш алыр, моғайын.

Салауат районы һабантуйы сиктәрендә үткән "Салауат йыйыны" фольклор байрамында, йылдағыса, һәр ауыл биләмәһе үҙенең тирмәһен ҡороп, уны салауаттарға ғына хас булғанса биҙәп, ҡунаҡтарҙы ихлас ҡаршылап торҙо. Һәр ауыл биләмәһенең унған хужабикәләренең ҡул эштәре, аш-һыуҙары юғары баһаға лайыҡ ине. "Иң бай милли ризыҡ" номинацияһында еңеүсе тип табылған Мөрсәлим ауыл биләмәһенең тирмәһендә жюри ағзалары башҡорт халҡының йөҙгә яҡын аш-һыу өлгөһөн теркәгән. Төрлө тематик күргәҙмәләр ойошторған ауыл биләмәләре халҡының был эше тирмәләр араһында үткәрелгән конкурстан бигерәк, "Салауат йыйыны" фольклор байрамына килеүсе балаларыбыҙ, мәҙәниәтебеҙ менән ҡыҙыҡһыныуысы сит милләт кешеләре өсөн файҙалы булды. Башҡорт халҡының бөтә булмышы: рухи һәм матди байлығы, йомартлығы, тарихы, мәҙәниәте һәм әҙәбиәте асыҡ сағыла бит уларҙа. Быйылғы тирмәләр ярышында беренселекте Арҡауыл ауыл биләмәһе яуланы.

Салауат районының һабантуйында ат сабышы, көрәш, бағанаға менеү, тоҡ кейеп һикереү кеүек традицион бәйгеләрҙән тыш, волейбол, еңел атлетика, гер күтәреү буйынса ярыштар ҙа үтте. Ә балалар өсөн Салауат районына 80 йыл тулыуға арналған шиғыр һөйләүселәр конкурсы уҙғарылды. Унда 23 мәктәп уҡыусыһы һәм балалар баҡсаһының 2 тәрбиәләнеүсеһе ҡатнашып, иҫтәлеккә Башҡортостандың халыҡ шағиры, яҡташтары Рәми Ғариповтың китабын, маҡтау ҡағыҙҙары алды. Жюри ағзаһы, Салауат районы мәғариф бүлегенең кластан тыш һәм тәрбиә эштәре буйынса методисы Лилиә Шәрәфетдинова әйтеүенсә, балаларҙың шиғыр һөйләүселәр конкурсы уларҙа тыуған яҡтарына ҡарата һөйөү, патриотик рух тәрбиәләргә, бөйөк яҡташтары менән генә түгел, үҙҙәренең дә башҡорт милләтле булыуҙары менән ғорурланыу тойғоһо уятырға ярҙам итә.

**Әйткәндәй, Айҙар Байыҡ сәсән исемендәге Республика сәсәндәр бәйгеһендә еңеүселәрҙең әйтеше аҙаҡ байрам майҙанында махсус әҙерләнгән "Сәсәндәр мәктәбе" сәхнәһендә дауам итте. Уларҙы Салауат, Ҡыйғы, Дыуан, Мәсетле райондары "Ағинәйҙәр ҡор"ҙары ағзалары тамаша ҡылды. Артабан, баһалама рәйесе, күренекле ғалим Әхмәт Сөләймәнов, Республика халыҡ ижады үҙәге эргәһендәге Сәсәндәр үҙәге етәксеһе Нәфисә Тулыбаева йыйылыусыларға сәсәнлек тураһында оҫталыҡ дәрестәре бирҙе. Сибайҙа сәсәниә Асия Ғәйнуллина етәкселегендә алып барылған эштәрҙә лә иҫәпкә алғанда, шөкөр, республикала сәсәнлек мәктәбен тергеҙеү буйынса эш башланды.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**



*Баһалама ағзалары әйтештә еңеүселәр менән.*

ИНТЕРНЕТТАН



# УРТАНСЫ БАЛАЛАР...

## һирәк алдаша

■ Калифорния тикшеренеүселәре хатта көслө һыҙланыуҙарҙы дауалау өсөн тәбиғи саралар тапҡан. Күп тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, хохлатка тигән үлән ауыртыуҙы баҫыу һәләтенә эйә икән. Уның составындағы үҙенсәлекле матдә дегидрокорибульбин кешенең эмоциональ торошо өсөн яуап биреүсе нейрондар әүҙемлегенә йоғонто яһай ала. Был матдәгә организм өйрәнмәй, шуға ла уны киләсәктә медицинала ҡулланырға уйлайҙар. Был үсемлек ҡытай халыҡ медицинаһында йыш ҡулланыла. Ул кешеләрҙе лә, хайуандарҙы ла дауалай.

■ Баланың ғаиләлә нисәнсе булып тыуыуы уның интеллектына йоғонто яһай, имеш. Голландияла был йәһәттән күп тикшеренеүҙәр үткәрелгән һәм ғалимдар бала ни тиклем өлкәнерәк була, уның интеллекты бәләкәс ҡустылары һәм һеңлеләре менән сағыштырғанда 18 йәшкә тиклем юғарыраҡ була икән. Әммә ғаиләләге өлкән балалар һимереү, аллергия менән йышыраҡ ауырый. Уртансы балалар һирәгерәк алдаша, улар фантазияға бирелеп бармай. Улар шулай уҡ икенсе яртыларына тоғорараҡ була. Өлкән балалар ныҡлы сәләмәтлектәре менән һәм хис-тойғоға артыҡ бирелеп бармауҙары менән айырылып тора.

■ Плимут университеты психологтары яман шеш менән ауырыусы өлкәндәрҙе тикшереп, уларҙың барыһын да бер нәмә берләштереүен асыҡлаған. Тикшеренеү барышында уларҙың яуаптарын астма, диабет, йөрәк ауырыуҙары менән яфаланыусыларҙың яуаптары менән сағыштырғандар. Һөҙөмтәлә, яман шеш менән ауырыусыларҙың 79 проценты юала саҡта физик язаларға дусар булыуы билдәле булған. Шундай стрестан һуң организмда яйлап онкологик сир барлыҡҡа килгән. Астма менән ауырыусыларҙың яртыһын ғаиләләрендә кәмһеткәндәр. Тимәк, бала саҡта алған стресс өлкәнәйгәс яман шеш, астма, йөрәк сирҙәренә алып килеүе ихтимал.

■ Йомортҡаның тышы сәләмәтлек өсөн файҙалы. Бактиһән, ул үҙенең составы буйынса һөйәк туҡымаһына оҡшаған һәм унда эремсек һәм йомортҡаның үҙенә ҡарағанда кальций күберәк. Венгрия тикшеренеүселәре үткәргән һынауҙар күрһәтеүенсә, йомортҡа ҡабығында организм өсөн кәрәкле бөтөн элементтар бар. Бынан тыш, ул рахит һәм анемия менән яфаланыусы балаларға файҙалы.

■ Психологтар фекеренсә, ҡатын-ҡыҙҙарҙың 85 проценты башҡаларҙың тормошонда булған хәлде ишетеүҙән ҙур ҡәнәғәтлек ала, ә һәр уныһсы гүзәл зат был серҙе башҡаларға ла һөйләй. Һуңғы яңылыҡтарҙы тикшереп алыу кешегә үҙенең тормошон тулыландырырға мөмкинлек бирә, имеш. Доктор Колин Гилл иҫәпләүенсә, ғәйбәт "сәйнәү" серотонин кеүек гормондар бүленеп сығыуына булышлыҡ итә, был гормондар стресс һәм хәүеф күләмен кәметә. Тимәк, ғәйбәт һөйләү - кешегә үҙен бәхетлерәк тойорға ярҙам итә. Гарвард университеты ғалимдары иҫәпләүенсә, ғәйбәт башҡа кешеләрҙең холҡо, характеры тураһында мәғлүмәт тупларға булышлыҡ итә, эволюция күҙлегенән сығып ҡарағанда, был үтә мөһим. Йәғни, кеше башҡалар миҫалында дөрөҫ йәшәргә өйрәнә.

ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ



**Беҙ - тәбиғәт балалары. Ләкин үҙебеҙҙең тәбиғи асылыбыҙҙан һаман йыраҡлаша барабыҙ кеүек. Борон ата-бабаларыбыҙ, әйтәйек, тәбиғәт күренештәренә, хайуандарҙың, ҡош-ҡорттоң үҙен тотошона, ҡылығына ҡарап ҡына ла байтаҡ фараздар ҡылыр, күҙаллауҙар яһар булған. Бөгөн дә халыҡ араһында был аҫыл аҡылдың һаҡланып ҡалған осмоттары йәшәй. Мин, мәҫәлән, бала саҡтан йылан ҡарғыштары тураһында байтаҡ әкиәт-хикәйәттәр ишетеп үҫтем. Һуңғараҡ уларҙың әкиәт кенә түгеллегенә ышанырға тура килде. Тәбиғәттең был мәхлүктәренең тотош кеше яҙмыштарына йоғонто яһай алыуы хаҡында ишетеп, аптыраған саҡтар булды. Бәлки, шулай тап килеү генәлер... Ә шулай ҙа...**

# ҠАТЫ ИКӘН ЙЫЛАН ҠАРҒЫШТАРЫ

Әйткәндәй, йылан менән тормош мине ай ярымлыҡ ҡына сағымда уҡ осраштырған. Имсәк кенә бала булғанмын. Бесәнгә алып барғандар. Сәңгелдәгемде ҡайын ботағына элеп, йоҡлатырға һалған да, әсәй бесән сабырға киткән. Ә мине ҡарап тороуҙы 8 йәшлек кенә апайға йөкмәткәндәр. Әлбиттә, бала кеше уйынға әүрәп киткән. Йөрөй торғас, барып ҡараһа, бөпес иҫһеҙ булып йоҡлай, ә өҫтөндә... йылан.

Бесән эшләп йөрөгән ололар барыһы ла сәңгелдәк эргәһенә ташлана. Бала йоҡлай. Ә ҡап-ҡара йылан ағастың олоно буйлап үрмәләп менгән дә, сәңгелдәк аҫылған ботаҡ буйлап, бала эргәһенә ынтылған. Сабыйға ҡул һуҙыуы ғына ерҙә сәңгелдәк бауына уралып тора, ти.

- Беҙ нимә эшләргә лә белмәй, аптырап ҡаттыҡ та ҡалдыҡ. Оләсәйең мәрхүмә доғаларын уҡый-уҡый, йыланға ялбара-ялбара, сәңгелдәкҡә бара башланы. Йылан башын сәкәйткән килеш ҡатып ҡалды. Оләсәйең шул рәүешле һине сәңгелдәктән алды. Йылан, арбалғандай, тик торҙо. Юғиһә, үрелеп кенә оләсәйеңдең ҡулын сағыу уға бер нәмә лә түгел ине, - тип хәтирәләр ебен тағатты әсәйем.

Беҙ бәләкәй саҡта ололар, йыланды үлтерергә ярамай, ҡарғышы ҡаты була, уның үҙен-үҙе ябарларға аяҡ-ҡулы юҡ бит, үҙең теймәһәң, теймәй, тертләп кенә саға бит ул, тип беҙҙе тыя торғайны. Зыяны теймәгән йыланды үлтерһәң, ҡарғышы ҡаты була, тигәндәре айырыуса нык хәтергә һеңеп ҡалған. Быңа ошонһон дәлилләрҙәй ваҡиғаларҙың әле лә булғылап тороуы этәрҙе мине был яҙмаларға. Беҙҙең Бөрйәндең бер ауылында йәшәп ятыусы танышымдың бәйән иткәне лә шуға дәлил. Ул мәктәптә уҡытыусы булып эшләй.

- Ғаиләбеҙ менән күмәкләп бесәнгә барҙыҡ. Бала-сағаларҙы ла алдыҡ. Киҫкә ҡарайыраҡ ирем, иртәгә кәбән ҡойоуға еңелерәк булыр, әйҙә, күбәләрҙе бөгөн тарттырып ҡайтайыҡ, тигәс, мин йәһәтләп күбә ебәрә башланым. Сираттағы бер күбәне ебәрһәм, аҫтында ҙур ҡара йылан ятып ҡалды. Күрһән, эҫенән ҡасып ингәндер инде. Бигерәк ҙур булғас, башта ҡыҙыҡ күреп, бергилке ҡарап торҙом. Уға тейеү, өҫтәүенә, үлтереү уйы бөтөнләй юҡ ине. Теге һаман ҡыбырламай тик яткас, һәнәгем менән төртөп ебәрҙем. Төҙләп, тоҫҡап төртмәһәм дә, башына ғына эләккән дә ҡуйған тегенең. Йылан әйләнә-тулғана башланы. Ат әйләнеп килмәгәс, һаман ҡарап торам быны. Бер ваҡыт йылан ҡапыл арҡаһына әйләнеп ятты ла, эсенән аяҡтарын сығарҙы ла күрһәтте. Аяҡтары сысҡан аяғы һымаҡ, үҙҙәре алһыу һыу. Хатта бармаҡҡа тартым нәмәләре лә күренә. Үлер сағында аяҡтарын кире тартып алды. Шунан тегене, бала-сағаға баҫып ҡуймаһын, тип, кырмыҫҡа иләүенә алып барып һалдым. Ошоноң менән онотолған һымаҡ ине был хәл. Тик шул йылдың ҡышына ҡапыл ҡаты итеп ауырып киттем. Температурам күтәрелде лә төшмәй ҙә ҡуя. Ниндәй диагноз ҡуйырға ла белмәйҙәр. Тире лә һөйәккә генә ҡалып бөттөм. Өфөгә лә барып ятып ҡараным. Көскә аяҡҡа баҫтым. Ә яҙға ирем ҡазаланды. Уның ғүмере йәшәү менән үлем араһында ҡалды. Ул да көскә шәбәйҙе. Күп тә үтмәй, яңғын сығып, донъябыҙ ҡаза күрҙе. Хоҙайҙың иҫкәртеүеме, шул саҡта әлләнә ниңә теге йылан иҫкә төштө бит.

Беҙҙең кәртә артында ла йылан була торғайны. Шуныһы - ул гел генә миңә тап булды. Шулай бер саҡ, өс йәшлек ҡыҙымды етәкләп, картуф утарға сығып барам. Уҫал этебеҙ бар ине. Ниңәлер, уны шул кәртә ағына бәйләгәнбеҙ. Теге эт миңә ҡарап, ярһып-ярһып өрә башламаһынмы. Аптырап киттем. Бүтән саҡта ҡойроҡ болғап ҡына тора торғайны. Нимәгә өрә икән был, тип, эткә ҡарай-ҡарай китеп барһам, күҙгә бер нәмә сағылып ҡалғандай итте. Ҡараһам, аяҡ аҫтыма оҙон йылан шыуышып инеп килә. Картуф ҡайғыһы китте, ҡыҙымды әләктерҙем дә өйгә йүгерҙем. Бер көн үтте, ике көн, юҡ, аяҡ тартмай бит картуф баҡсаһына. Ә сүп үләне мине көтөп торамы. Бер көндө, ниһайәт, ҡурҡыуымды еңеп, сығырға булдым. Баҡсаның ҡапҡаһына тотоноуым да булды, әлеге йылан шыуып килеп сыҡмаһынмы. Кире өйгә елдерҙем. Шунан һуң ҡайным ул йыланды табып, үлтереп ҡуйҙы. Күп тә үтмәй, буралай һыйырыбыҙҙы айыу йыҡты...

**Таңһылыу БАҺАУЕТДИНОВА.**
**Бөрйән районы.**
**(Дауамы бар).**

КИТАБЕННАС

# АҢЫҘДЫ УЯТ,

## йәки "Бәйғәмбәр" китабы тураһында




**Был китаптың авторы - Джебран Хәлил Джебран 1883 йылдың 6 ғинуарында Ливандың төньяғындағы Бшарр ҡалаһында тыуған. Бик ҡатмарлы яҙмыш юлы үткән яҙыусы ғәрәп һәм инглиз телдәрендә берҙәй ирекле яҙа алған. Донъя әҙәбиәтендә туған теленән тыш икенсе берәй сит телде камил үҙләштереп, үҙ стилен тапҡан ике телле яҙыусылар бик һирәк. Хәлил Джебран ана шундайҙарҙың береһе. "Бәйғәмбәр" исемле китабы XX башында донъя күргән. Иғтибар иткәнегеҙ бармы, ҡайһы бер китапты уҡығанда урыны-урыны менән "Ысынлап та, шулай бит!" тип ҡысҡырып әйтке килә. Был авторҙың фекере менән һинең фекереӊ тап килгән осраҡта булалыр, моғайын. Ә ҡайһы бер китапты көсәнеп уҡыһаң да, ҡабул итеп булмай. Ул - һинеке түгел. Галилей: "Кешене быға тиклем белмәгәненә өйрәтеп булмай, бары тик белгәненән уның аңында уятырға мөмкин", - тигән. Бәлки, ысынлап та, шулайҙыр - уҡыусы әҙер булмайынса, уҡытыусы килмәй, тиҙәр бит. "Бәйғәмбәр" китабы бынан ике быуат элек яҙылһа ла, уны уҡығанда "Ысынлап та, шулай бит!" тип әйткән урындарым күп булды. Иғтибарығыҙға аңымды яҡтыртҡан бәләкәй генә өлөштәрен тәҡдим итәм, китапты үҙегеҙ уҡыһағыҙ, унда үҙегеҙҙең яҡтылыҡ нурҙарын табырһығыҙ...**

### Бәйғәмбәрҙән һөйөү тураһында һөйләүен үтенгәндәр...

"Әгәр ҙә Һөйөү үҙе артынан саҡырһа, уға эйәрегеҙ, - тигән Ул. - Уның юлдары ауыр һәм һикәлтәле булһа ла эйәрегеҙ. Һөйөү һеҙҙе үҙ ҡосағына алһа, ҡаршылашмағыҙ, уның һәр һүҙенә ышанығыҙ. Уның тауышы хыялдарығыҙҙы селпәрәмә килтергәндә лә - ышанығыҙ. Ут-һыуҙар аша үтмәйенсә, йөрәк серен белеп, үҙенде Илаһилыҡтың өлөшө итеп тойоп булмай.

Әгәр ҙә ҡотоғоҙ оса, Һөйөүҙән һеҙ тик тыныслыҡ һәм ләззәт кенә эҙләйәсәкһегеҙ - һөйөү сафлығы һөйөү уйынына әйләнәсәк. Ул саҡта инде Һөйөү ҡосағын ташлап китеүегеҙ хәйерле. Һеҙ көләсәкһегеҙ, ләкин инде көлөү һеҙҙеке булмаҫ, иларһығыҙ - күҙ йәштәре лә яттыҡы булыр. Сөнки Һөйөү һеҙгә үҙенән башҡа бер ни ҙә бирмәй һәм бер ни ҙә талап итмәй. Һөйөү бер нәмәгә лә хужа түгел, ләкин уға ла баш булып булмай, сөнки Һөйөүгә һөйөүҙән башҡа бер ни ҙә кәрәкмәй. Әгәр ҙә һөйһәгеҙ, "Йөрәгемдә Илаһилыҡ биләне" тип түгел, ә "Мин Илаһилыҡтың йөрәгендә", тип әйтеү хәйерле. Һөйөүгә йүнәлеш биреп маташмағыҙ, әгәр ҙә ул һеҙҙе ҡосағына алһа, үҙе йүнәлеш бирәсәк..."

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

# УҒА ТИҢ ШӘХЕС ЮҠ,

## йәки Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең исемлектә беренсе булғаны

**Яраталар ҙа инде Ҡушма Штаттарҙа төрлө рейтингтар төҙөү менән булышырға. Иң бай кешеләр рейтингы бар, иң ышаныслы автомобилдәр теҙеме, иң матур кешеләр, иң ҙур уңышҡа өлгәшкән музыканттар һәм башҡа төрлө исемлектәр...**



Электрон китапты уйлап сығарған американлы Майкл Харт бер көн баш ватырға тотона: "Миллиардлаған Ер шары йәшәүселәренән кем тарих ағышына иң мөһим йоғонто яһаған?". Ошо һорауға үҙ яуабын Харт 1978 йылда донъя күргән һәм 1992 йылда ҡабат баҫылып сыҡҡан "100 иң бөйөк кеше" энциклопедияһына индерә. Китапта күренекле шәхестәрҙең ҡыҫҡа биографияһы рейтинг системаһында бирелгән. Кешелек тарихына иң көслө тәьҫир итеүсене билдәләү ниәтен төп принцип итеп ҡулланған Харт, мәҫәлән, ғалимдың фән өлкәһен үҫтереүгә ғәйәт ҙур булышлыҡ иткәнен күҙ уңында тотоп, Исаак Ньютонды икенсе урынға ҡуя. Пенициллинды асҡан бактериолог Флемингты 43-сө урында табабыҙ, Колумб - 9-сы позицияла, Иосиф Сталин - 66-сы. Лао-цзы, Иоганн Бах, Фрейд, Кеннеди, Гомер, Елизавета I һәм башҡа шөһрәт ҡаҙанған әҙәм заттарын да күрергә мөмкин бында.

Ә ниндәй арҙаҡлы исем иң юғарыла урынлашҡан икән? Беренселекте, белергә теләһәгеҙ, "уникаль тарихи шәхес" яулаған. Ул да булһа - Мөхәммәт бәйғәмбәр. Был факт "бәғзе китап уҡыусыларын ғәжәпләндерер, икенселәрҙең ризаһыҙлығын тыуҙырыр, - тип яҙа автор. - Ләкин Мөхәммәт (с.ғ.с.) тарихта берҙән-бер ошондай кеше, кемдең эшмәкәрлеге дини өлкәлә лә, донъяуи, фани юҫыҡта ла ғәҙәттән тыш уңышлы ине. Сығышы менән түбән социаль ҡатламдан булған был кеше, бөйөк донъя диндәренең береһенә нигеҙ һалды, ифрат ҙур уңыштарға өлгәшкән сәйәси лидер булып китте. Бөгөнгәсә, үлеменән һуң ун өс быуат үтһә лә, ғаләмдә уның ҡаҙаныштары шауҡымы ғәжәйеп ҡеүәтле".

Ысын бөйөклөк ябайлыҡта, тиҙәр. Иҫәпһеҙ һынауҙарҙы үтеп, ауырлыҡтарҙы сабырлыҡ менән кисереп, изге миссияһын башҡарып, тауҙар бейеклегендәй дәрәжәләргә олғашты Бәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.). Тормош, ҡолас йәйеп, һәммә рәхәттәрен, байлыҡ-ниғмәттәрен яуҙырырға әҙер ине, бар ерҙә ҡәҙер-хөрмәт көттө, данлы ҡалалар, ололап, тәхет башына ултыртырға ниәтләп, ишектәрен асты... Ләкин донъя ләззәттәрен үҙ итмәне Мөхәммәт (с.ғ.с.). Ябай йәшәйешен тамсы ла яҡшыртырға уйы булманы уның.

Бер көн Аллаһ рәсүленең өйөнә сәхәбәһе Ғүмәр (р.а.) килеп инә. Буш бүлмә, иҙәндә септә түшәк. Мөйөштә бер үлсәү арпа оно. Эргәһендә сөйҙә сүмес эленгән. Барлығы шул! Ғүмәр (р.а.) был ярлылыҡты күреп, илап ебәрә: "Византия хакимдары һәм Персия шаһтары хазинаға сумып йәшәйҙәр. Ә Аллаһ илсеһенең булған байлығы кипкән септәнән ғибәрәт!" "Ғаләмдә бар нәмә Аллаһы Тәғәлә бойондороҡлоғонда, беҙҙеке түгел. Ошо фани донъя нимәгә кәрәк миңә? Кешеләр йәйге көндә арып, ағас күләгәһендә бер аҙ ял итергә туктап, яңынан ҡуҙғалып киткән юлсылар һымаҡ бында", - тип яуаплаған Мөхәммәт ғәләйһис-сәләм.

Бер нисә көн рәттән ут яғылмай торған замандар ғәҙәти хәл була Бәйғәмбәр ғаиләһе өсөн. Ҡарыны асҡан ваҡытта бер тапҡыр ҙа зарланыу һүҙҙәрен ысҡындырмай ул, киреһенсә, рәхмәтле булыуын белдереп, тәсбих әйтә Аллаһы Тәғәләгә. Ҙур байлыҡтар ҡулға килеп ингән мәлдәрҙә инде таң ҡалдырырлыҡ йомартлыҡ менән һуңғы тингәсә мохтаждарға тарата, ярлыларға өләшә, үтенгәндәргә ярҙам итә.

"Бер әҙәм балаһының рухы ла хакимлыҡ итеү һынауына сыҙай алмай". Платондың быуаттар төпкөлөнән билдәле ошо һүҙҙәрендә хаҡлыҡ бар. Власть татлы емеш, әммә күңел өсөн зарарлы шул. Уның зәһәренән рухты паклыҡта һаҡлап ҡалыу - ысын мәғәнәһендә мөғжизә. Бөйөктәрҙән-бөйөктәр генә атҡара алған кәрәмәттәр ул.

Мөхәммәт бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм йәштән үк ырыуҙаштары араһында намыҫлы кеше булараҡ таныла, хатта халыҡ уны "әл-Әмин" (тоғро, ышаныслы) тип хөрмәтләп исемләй. Нәбилек дәүерендә Аллаһ илсеһенең (с.ғ.с.) күңел күркәмлеге тулыраҡ рәүештә асыла. Бәйғәмбәрҙең ҡатыны Ғәйшә (р.а.) ошондай иҫтәлектәр һаҡлаған ире хаҡында: "Бер кемде лә оялтманы, битәрләмәне; яуызлыҡҡа яуызлыҡ менән түгел, ә ғәфү итеү, яҡшы мөнәсәбәт менән яуап бирҙе ул, ямандан, насарлыҡтан ситләште. Әсиргә эләккәнгә, хеҙмәтсегә, хатта бер йәнлеккә лә һуғыу ғына түгел, хаҡһыҙ ҡағылырға баҙнат итмәне".

Йәмғиәт менән идара итеү дөрөҫлөккә, хәҡиҡәткә нигеҙләнә Мөхәммәт ғәләйһис-сәләмдең дәүләтендә. Мәшһүр сәйәсмән, фәйләсуф Лафайет, киң билдәле "Кеше хоҡуҡтары декларацияһы"н нәшер итеү алдынан бар юридик системаларҙы өйрәнеп, ислам хоҡуғының өҫтөнлөгән танып, һоҡланыуын йәшермәй: "О, Мөхәммәт! Ғәҙеллек, хаҡлыҡта шул тиклем юғары күтәрелдең һин - бөгөнгәсә берәү ҙә тиң түгел һиңә, һуңынан да тиңләшә алмаясаҡ!".

Мөхәммәт ғәләйһис-сәләм күп түрәләрҙең "профессиональ сире" - тәкәбберлектән азат була, мөьминдәрҙе үҙен артыҡ ололауҙан киҫәтә: "Һеҙ минең дәрәжәмде саманан тыш күтәреп, ҙурламағыҙ! Аллаһы Тәғәлә бит миңә "Рәсүл" тип өндәшер алдынан "Ҡолом" тигән".

Бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм бер ҡасан да үҙен кемдәндер өҫтөн ҡуймаған. Инсандарҙы ғына түгел, бар йән эйәләрен ихтирам итеп йәшәгән. Бер мәл сиреүҙәре менән ҡайтып килгәндә юлда көсөкләгән инә эт ятҡанын белеп ҡала. Тәүҙә бер һалдатҡа эт эргәһендә тороп, уны ҡурсаларға бойороҡ бирә, ләкин хайуанды бөтөнләй маҙаһыҙламаҫ өсөн, 25 меңлек (!) ғәскәренең юлын үҙгәртә. Оло мәртәбәләре менән файҙаланып, махсус номерҙар тағып, светофорҙың ҡыҙыл утына елдереп үткән башлыҡтар, уларҙың башҡа "аҫыл заттарса" ғәмәлдәре күҙ алдына баҫҡан һайын, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең (с.ғ.с.) ошо инсафлығы иҫтә китәрә.

Тарихта яҡты эҙ ҡалдырырға, абруй ҡаҙанып, коллективта, йәмғиәттә лайыҡлы урын алып, булдыҡлы шәхестәр рәтен тулыландырырға теләмәгән кеше юҡтыр. Уңыш, бәхет ишегенә аҫҡыс эҙләп, беҙ йыш ҡына ниндәйҙер популяр замандаштарҙың көнитмешенә күҙ һалып, уларҙың тәжрибәһенә таянырға тырышабыҙ. Психолог, тьюторҙар, тренинг үткәреүселәрҙең төрлөсә аҡыл өйрәтеп маташыуын тыңларға әҙербеҙ. Ә меңәрләгән йылдар һуҙымында бәҫен төшөрмәгән, бөйөктәрҙән-бөйөк Мөхәммәт бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм мираҫына, нишләптер, мөрәжәғәт итмәйбеҙ. "Аһ, дариға!" тип, Аҡмуллалай үкенерлек булмаһын өсөн Аллаһ илсеһе (с.ғ.с.) өлгөһөндә үҫешеү зарурҙыр. Мөхәммәт бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләмдең феноменаль шәхесе бәрәкәт эстәгәндәр өсөн иң яҡшы үрнәк икәнлеге иң әүәл Ҡөрьәндә бирелгән һәм дәүерҙәр һуҙымында раҫланған хәҡиҡәт, уйлана белгәндәргә билдә.

**Альбина ҒӘЛИЕВА.**
**Учалы ҡалаһы.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## Эгоизмдың бәҫе

### Уҡымышлы эгоизм зарурлығы

Һөҙөмтәлә был система ике яҡты ла - "Башҡалар тураһында хәстәрлек күрергә тейешлеләрҙе" лә, һәр ваҡыт кемдәндер нәмәлер көтөп ултырыусыларҙы ла аҫҡа һөйрәй. Иң киң таралған мемдарҙың береһе, әлбиттә, байҙарҙың сығымдарын ҡыҫҡартыу тураһындағы фекер. Йәнәһе лә, улар ярлылар иҫәбенә байый. Әммә был да уңышлы булыуығыҙ өсөн ғәйеп тойғоһон уятыу һәм һеҙҙең менән идара итеү еңел булһын өсөн уйлап табылған уйҙырма.

Әгәр башҡалар хаҡына үҙегеҙҙе һәм ҡиммәттәрегеҙҙе ҡорбан итәһегеҙ икән, был һеҙҙең тәүәккәллекте ҡаҡшата, шик тыуҙыра башлай. Ахырҙа, үҙегеҙ өсөн нимәлер эшләгән һайын, ғәйеплелек тойғоһо көсәйә барасаҡ.

Мәҫәлән, эшҡыуар никтыуҙы хеҙмәткәрен ниндәйҙер сәбәп менән йәлләп кенә эштән бушатмай икән, коллективта бындай хеҙмәткәрҙең булыуы башҡаларҙың әхлаҡи именлегенә хәүеф менән янай. Сөнки улар йөктө үҙҙәренең елкәһендә тартыуын яҡшы аңлай. Улар ҡәнәғәтһеҙлек белдерә һәм асыулана башлай, хеҙмәт етештереүсәнлеге кәмей; хатта иң тырыш һәм үҙ эшенә бирелгән хеҙмәткәрҙәр ҙә лайыҡлы ихтирам, лайыҡлы баһа ала алмайынса, күрһәткестәрен түбәнәйтә башлай. Клиенттарҙы хеҙмәтләндереү кимәле насарланыуы һатыу әйләнешенең кәмеүенә килтерә, был инде үҙ сиратында компанияның яҙмышына йоғонто яһай.

Ә хәҙер, әйҙәгеҙ, эшҡыуар барыһын да киреһенсә эшләй тип күҙ алдына килтерәйек. Ул әхлаҡһыҙ кешене саҡырып алып, уның эштән ни сәбәпле ебәрелеүен аңлата. Был хеҙмәткәргә тормошҡа ҡарашын үҙгәртеү өсөн сигнал да булып тороуы мөмкин, кире осраҡта, уны шулай уҡ икенсе урындан да ебәрәсәктәр. Ә еткәсе компанияһының киләсәге хаҡында хәүефләнмәй генә артабан эшләйәсәк.

Шулай уҡ һәр саҡ иренән кәмһетеүҙәр ишетеп, шуға түҙеп йәшәгән ҡатындың да тәртибен һынғай тип булмай. Ул һәр саҡ аяғының осонда ғына йөрөй, ирен ҡыуып сығарырға йәки айырылышырға ҡурҡа һәм шуның менән уға насарлыҡ эшләй: һөҙөмтәлә ике яҡ та бәхетһеҙ, ике яҡ та ыҙаланып йәшәй. Ә хәҙер уйлап ҡарағыҙ, әгәр ҡатын кеше үҙенең ҡиммәттәрендә ныҡлы ышаныс тойоп, ире беренсе тапҡыр кәмһеткәндә үк өйөнән сығып китһә, ул үҙен эгоистик рәүештә өмөтһөҙлөккә бирелгән, ғифриткә ҡорбан итеп килтерелгән хайуани тормоштан азат итер ине.

Шәхси ихтыяж беренсе сиратта ҡәнәғәтләндерелгән азат йәмғиәттә кеше үҙен ғәйепле тоймай һәм тынысһыҙланмай. Үҙ-үҙеңде ҡорбан итеү - ул түбән үҙбаһа сәбәбе генә түгел, ә азатлыҡҡа, кешелеккә ҡаршы енәйәт. Әгәр әүҙем граждандарҙың энергияһын паразит төркөмдәр һурып тора икән, әүҙем булыуҙың мәғәнәһе бармы? Һәр кеше башҡалар менән ҡиммәттәрҙе ирекле алмашыу принцибына нигеҙләнеп йәшәү өсөн аҡса табырға тейеш. Тимәк, бер ниндәй ҙә ташлама булырға тейеш түгел, әгәр лайыҡлы эшләп тапмағанһың икән, күкрәк киреп йөрөүҙә генәме ни мәғәнә?

**Рэнди ГЕЙДЖ.**



## 29 ИЮНЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 02.20, 03.05 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.20 "Время покажет" (16+).
16.05, 03.30 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Соблазн". Мелодраматический сериал. 1-я и 2-я серии (12+).
23.30 "Познер" (16+).
00.30 Ночные новости.
00.45 "Мотель Бейтс". Сериал (16+).
03.00 Новости.
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Рассудят люди". Ток-шоу (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
